✓ *Июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, 2012 йылдың икенсе яртыһына баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтырға онотмағыҙ. Кем "Киске Өфө"гә июнь айында яҙылған, квитанцияһын редакциябыҙға ебәреп, бәхетен һынап ҡараһын: 3 кеше "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына, 3 кеше Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" тигән китабына эйә буласаҡ. Ҡалған уҡыусыларыбыҙға иһә "Айыҡ түй сценарийҙары" китабын бүләк итәсәкбеҙ.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2 - 8 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№22 (492)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Мөхәмәтша Буранғолов та...** башҡа шәхестәр янында



5

**Рәхмәтле һәм бәрәкәтле ерҙә...** йәшәү тәмен беләләр



6

**Аҡса, фатир, машина ғына түгел...**



8-9 йәш кешенең белеме лә - ҙур капитал

**"Урал моңо"...** рухи бәйләнеште нығыта



11

14 ТВ-программа


УРА!

# ЕҢЕҮСЕ - СЫҢҒЫҘХАН,

## йәғни Денис Шафиҡов!

**Был аҙнала баш ҡаланың "Өфө-Арена" майҙанында үҙенсәлекле сара - башҡорт спортсыһы ҡатнашлығында профессиональ бокс кисе уҙҙы. WBA Интерконтиненталь чемпионы исеменә ике бокс йондоҙо - сығышы менән Силәбе өлкәһенән булған башҡорт егете Денис Шафиҡов менән Италия өсөн сығыш яһаусы Куба спортсыһы Брунет Замора көс һынашты.**

Был төп һуғыш алдынан тамашасыларҙы ҡыҙҙырып алыу өсөн биш андеркарт уҙғарылды. Унда Рәсәй, Үзбәкстан, Төньяҡ Осетия, Грузия спортсылары сығыш яһаны.



Денис Шафиҡов менән Брунет Збмораның 2010 йылдағы осрашыуы бер яҡтың да еңмәүе менән тамамлана. Әлеге һуғышта беренсе раунд тыныс ҡына үтһә, икенсе өс минутта Денис дөрөҫ иҫәпләнгән бер нисә һуғыу менән өҫтөнлөк алды. Туғыҙынсы раундта Замора үҙенең хәлен бер аҙ тигеҙләй алды. Спортсылар арыһалар ҙа, 12 раундты ла тамамлап ҡуйҙы. Судьялар бер тауыштан, Европа чемпионы билбауына "Сыңғыҙхан"- Денис Шафиҡов лайыҡ, тип ҡарар итте.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *1 июнь Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө, тип билдәләнә. Һеҙҙеңсә, балаларҙы нимәнән һәм кемдән яҡларға, һаҡларға кәрәк бөгөн?*

***Тамара ИСКӘНДӘРОВА, "Аҡбуҙат" журналының баш мөхәррире:*** Сетерекле һорау. Элек-электән балаһын камил, булдыҡлы, тәүфиҡлы, эшһөйәр һәм илһөйәр итеп үҫтерергә теләгән кеше алдында ошондай һорау торған һәм әле булһа тора. Урам тәрбиәһенән баланы һаҡларғамы, юҡмы? Берәүҙәр, эйе, мотлаҡ, тип яуаплай. Икенселәр, бала тормоштоң ысынбарлығын бәләкәйҙән күреп, аңлап үҫергә тейеш, тип бара. Хаҡлыҡ ҡайһыһында? Айырыуса бөгөн - тәрбиә мәсьәләһен, бер яҡтан, уғата ҡатмарлаштырған, икенсе яҡтан, "еңелләштергән" интернет заманында? Балаларыбыҙ башкөлләй ирреаль тормошҡа сумды, уларҙы төрлө социаль селтәрҙәрҙән, аськанан сығарып алырмын тимә. Яратҡан шөғөлдәренә ҡарата тәнҡит һүҙен ишетергә лә теләмәйҙәр, ә өлкән быуынды артта тороп ҡалған, заманса фекерләй белмәгән итеп күрәләр. Ә бит төптән уйлап ҡарағанда, өйгә туранан-тура интернет сымы аша белмәгән-күрмәгән ят бауыр әҙәмдәр килеп инеп, беҙҙең "ыуыҙ" ғына балалар аңына үҙе теләгән психологик бомбаны һалып сыға һәм ошо рәүешле быуаттар буйына камиллашып килгән тәрбиә алымдары кире ҡағыла. Ярым-шаярыу, уйын-көлкөлө һүҙ, төртмә тел аша ғына ла күпме матур ғәҙәттәрҙе тәрбиәләй алған халҡыбыҙ бөгөн килеп ят бер аҡылдың өнһөҙ ҡолона, әмерҙәрен һис һүҙһеҙ башҡарыусыһына әйләнеп ултырмаймы икән, тип борсолам.

"Киберенәйәт" кеүек яңы бер ҡурҡыныс шөғөл менән булыусыларға йәш быуын юлығып ҡуймаһын ине. Был турала балаларға, йәштәргә ныҡлы аңлатыу эше алып барырға, уларҙы интернет донъяһында баштарын юғалтмаҫлыҡ итеп әҙерләргә кәрәк. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, "Аҡбуҙат" журналында ошо юҫыҡта ла эш алып барабыҙ.

Йәш быуын шуны аңлаһын: шырпы һыҙып ут сығарырға ла була, шырпы ярҙамында усаҡ яғырға, өй йылытырға, ашарға бешерергә лә мөмкин. Интернет та шулай - уның файҙалы һәм ярамаған яғын айыра белеү фарыз.

**(Дауамы 2-се биттә).**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЛА САҠТЫҢ...

## һуңғы тантанаһы



**25 майҙа республиканың барлыҡ мәктәптәрендә лә һуңғы ҡыңғырау яңғыраны. Башҡортостанда быйыл мәктәпте 70 меңгә яҡын сығарылыш уҡыусыһы тамамлай, уларҙың 27 меңдән ашыуы - 11-се синыф уҡыусыһы. Был шатлыҡлы көндә Өфөлә урынлашҡан милли мәктәптәрҙәге һуңғы ҡыңғырау тантаналарын тамаша ҡылдыҡ беҙ ҙә.**

Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты менән 204 бала, шул иҫәптән, сит өлкәләрҙән 26 уҡыусы хушлаша. Йылдағыса, сығарылыш уҡыусылары араһында алтын һәм көмөш миҙалға дәғүә итеүселәр һаны байтаҡ ҡына - 34 уҡыусы. Быйылғы сығарылыштан 32 уҡыусы Санкт-Петербург һәм Мәскәү вуздарында белем алыуҙы өҫтөнөрәк һанай. Тик егеттәр генә белем алыусы Башҡорт республика лицей-интернатын 59 уҡыусы тамамлай, уларҙың 10-ы миҙалға дәғүә итә. Был белем усағының сығарылыш уҡыусылары башлыса техник йүнәлештәге вуздарҙы һайлауҙары менән айырылып тора. Һупайлы биҫтәһендәге М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы 28 уҡыусыһын оло юлға сығара. "Быйылға миҙалға дәғүә итеүселәр булмаһа ла, уларҙың һәр береһе йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнашты. Улар араһында иң өмөтлө спортсыларыбыҙ, олимпиадаларҙа еңеү яулаусыларыбыҙ күп", - ти уҡытыусылар. Был лицей уҡыусыларының күбеһе БДИ-ны йәмғиәтте өйрәнеү, физика, тарих фәндәренән тапшырасаҡ. Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһын 50 уҡыусы тамамлай. Сығарылыш уҡыусылары араһында алтын һәм көмөш миҙалға дәғүә итеүселәр бар. Был уҡыу йортонон да уҡыусылары артабан белемен Рәсәй һәм республика юғары уҡыу йорттарында дауам итергә хыяллана.

**(Дауамы 4-се биттә).**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# БАЛА ҠАРАП...

## пенсияма өҫтәмә аҡса эшләйем



**Ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләнем, ә хәҙер хаҡлы ялдамын. Тағы ла эшләргә мөмкинлек бар ине, ләкин һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, үҙ яйы. Берҙән, кеше бер ваҡыт ял итергә туҡтарға ла тейеш. Икенсенән, йәштәргә лә эш урындары кәрәк. Шуға күрә, ваҡыты етеү менән мәктәп менән һис үкенеүһеҙ хушлаштым, сөнки үҙемдә психологик йәһәттән быға әҙерләгәйнем.**

Хаҡлы ялда булһам да, эшһеҙ ятмайым. Бигерәк тә ауыл ерендә төрлө мәшәҡәттәр байтаҡ: өйҙә лә ҡарайһы бар, баҡсаһына ла, мал-тыуарына ла өлгөрөргә кәрәк, ейән-ейәнсәрҙәргә лә ваҡыт еткереү мөһим. Балалар күрше ҡалаға йөрөп эшләй, ә ауылда балалар баҡсаһы юҡ, шуға күрә ейәндәремде һәр ваҡыт миндә ҡалдыралар. Шулай уҡ минең бәләкәй генә "балалар баҡсаһында" ауылдың башҡа балаларына ла урын табыла. Тормош ҡайнай, йәшәү дауам итә һәм кешегә һәр ваҡыт ҡайҙалыр барып килергә кәрәк ваҡыттар була. Ошо саҡта күрше-тирә, шулай уҡ ауылдың башҡа йәш әсәй-атайҙары ла, ҡалаға барып килгәнсе, балаларын миндә ҡалдыра һәм бының өсөн аҡса түләй. Улар, күп булһа, ике-өс сәғәт йөрөп килә, ә минең ҡулға әҙме-күпме аҡса төшә. Әлбиттә, ҡомһоҙлоҡҡа барып, аҡсаны үҙем һорамайым, кем күпме бирә ала, шул тиклем үҙҙәре тоттора. Ғөмүмән, көн дә икмәк-тоҙлоҡ, тәм-томға аҡса килеп тора. Шулай итеп, пенсияма өҫтәмә аҡса эшләйем. Бабай әйтмешләй: "Минең эшҡыуар әбей үҙе лә шат, башҡалар ҙа ҡәнәғәт".

Үҙемдең бер аҙ аҡса эшләү юлын гәзит уҡыусылар менән дә бүлешкем килде, бәлки, берәйһенә ярап ҡалыр. Хәҙер ауылдар үҫә, йәш ғаиләләр арта, балалар тыуа, ә барлыҡ ерҙә лә балалар баҡсаһы юҡ һәм бөтәһе лә өләсәйле түгел.

**Нәйлә АҠЫЛБАЕВА.**
**Мәләүез районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# 1 июнь Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө, тип билдәләнә. Һеҙҙеңсә, балаларҙы нимәнән һәм кемдән яҡларға, һаҡларға кәрәк бөгөн?



**(Башы 1-се биттә).**

***Милана СКОРОБОГАТОВА, Башҡортостан Республикаһының Бала хоҡуҡтары буйынса вәкиле:*** Битарафлыҡтан, тиер инем иң тәүҙә. Йәлма мөнәсәбәттән, бала яратмауҙан, агрессиянан, яуапһыҙлыҡтан, тупаҫлыҡтан, атаәсәле көйө етемлектән... Ғөмүмән, бала күңелен яҙалаусы, уның хоҡуҡтарын боҙоусы һәм кешелек баһаһын кәметеүсе бөтә нәмәнән араларға кәрәк баланы. Бала өсөн иң кәрәк донъя - ул тулы һәм татыу ғаилә. Ата-әсә наҙын, йорт йылыһын бала фәҡәт ғаиләлә генә тоя ала, ошонда уның киләсәктәге үҙ аллы тормошоноң йүнәлештәре һыҙатлана. Бөгөн иң мөһим һәм киҫкен проблема - ул балаларҙы етемлектән һаҡлау. Ғаиләһеҙ тороп ҡалған бала - ул эшенән дә, яҡын кешеләренән дә яҙып, тормош мәғәнәһен юғалтҡан өлкән кеше менән тиң, тип әйтер инем.

Республикабыҙ Президенты Рөстәм Хәмитов тарафынан быйылғы йыл "Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы" тип юҡҡа ғына иғлан ителмәне бит. Ғаилә - сабыйҙың ышаныслы ҡалҡаны. Ғаилә имен, тулы һәм татыу булһа, бала ла яҡлаулы. Ғаиләлә иғтибар етмәгән баланы һәр ерҙә хәүеф һағалай. Элек ата-әсә үҫмерҙәргә урам тәьҫиренән ҡурҡһа, хәҙер бала өйөндә ултырып та әллә күпме негатив ала. Шул уҡ мәғлүмәт мөхитен генә миҫалға килтерәйек: хәҙер интернет нимәгә генә өйрәтмәй йәш быуынды! Телевидениенан ирекһеҙләп тағылған криминаль сериалдар фәҡәт һуғыш, террор, көс ҡулланыу күренештәре менән тулған. Кескәйҙәр өсөн мультфильмдар ҙа бит тотош тигәндәй сит ил продукцияһы, тормошҡа мөнәсәбәте менән уларҙа ла беҙҙең балалар өсөн төптө ят донъя һәм ҡылыҡтар һүрәтләнә. Йә булмаһа, мәсәләлән, компьютер уйындарын алып ҡараһаҡ - унда ла һуғыш та үлтереш. Бала уйынға шул тиклем бирелә, бер үҙендә бернисә ғүмерҙе кисерә, берсә үлә, берсә терелә. Шулай итеп, ул ғүмер һәм үлем төшөнсәләрен бутай башлай, үлем хәүефһеҙлеген юғалта. Интернеттағы файҙалы нәмәләрҙе бер кем дә инҡар итмәй, ләкин психикаһы нығынып етмәгән бәләкәйҙәр һәм үҫмерҙәр өсөн унда хәүефле янауҙар ҙа бик күп.

Балаларға ҡарата яһалма, формаль мөнәсәбәт тураһында башта әйтеп киткәйнем инде. Мәктәп хәҙер, үкенескә ҡаршы, балаларҙы тормош ҡиммәттәрен дөрөҫ билдәләргә һәм баһаларға өйрәтмәй. Уҡыусы эшмәкәрлегенең баһаһы - имтихан да тест. Балалар уйламаҫҡа өйрәнде, матур итеп фекерҙәрен бәйән итә алмайҙар, шиғыр яҙыусы балалар бик һирәк. Классик әҙәбиәт томдарын китап шкафтарында саң баҫты.

Ғаиләлә һәм мәғариф учреждениеларында балаларҙың хоҡуғын тәьмин итеү күп йәһәттән ата-әсәләрҙең, шулай уҡ педагогтарҙың хоҡуҡи мәҙәниәте кимәленә бәйле. Улар балаларҙың дәүләт тарафынан ниндәй хоҡуҡи акттар менән яҡланғанлығы тураһында хәбәрҙар булырға тейеш, тигән фекерҙәмен. Бөгөнгө көндә ғәмәлдә булған "Бала хоҡуҡтары тураһында" БМО Конвенцияһы, РФ-ның Ғаилә кодексы, "Рәсәй Федерацияһында бала хоҡуҡтарын яҡлауҙың төп гарантиялары тураһында", "Мәғариф тураһында"ғы закондар ғаиләлә һәм мәктәптә балаларҙы бөтә төр көс ҡулланыу формаларынан яҡлау буйынса төп документтар булып тора һәм уларҙы һәр ата-әсә белһен ине.

***Азамат ЮЛДАШБАЕВ, "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире:*** "Балаларҙы яҡлау көнө"н билдәләгән дәүләттең киләсәге хәүефле, сөнки балалар бер көндә генә түгел, ә йылдың һәр көнөндә һәм төнөндә үҙҙәрен яҡлаулы һәм һаҡлаулы тойорға тейеш. Шулай уҡ балаларҙы бөгөнгө көн боҙоҡлоҡтарынан, ата-әсәләрҙең нәфсе тигән шайтанынан да ҡурсалау мөһим. Бөгөнгө көн атай-әсәйе ваҡытында үҙенә етмәгәнде, теймәгәнде, эләкмәгәнде балаһында күрергә теләй, ҡасандыр үҙенең тормошҡа ашмай ҡалған хыялына нәҡ балаһы яҙмышы аша өлгәшергә тырыша, ә был, үҙ сиратында, баланың иркен сикләүгә, уның рухын көсләүгә алып килә. Был дөрөҫ түгел, сөнки бала тәбиғәттәге һәр бер мөғжизә кеүек, үҙ алдына ирекле үҫергә һәм нығынырға тейеш.

Был мәсьәләгә икенсе яҡтан да күҙ һалыу мөһим. Әгәр ҙә дәүләт балаларҙы ҡайғырта икән, тәү сиратта, ошо балаларҙың ата-әсәһен яҡларға тейеш, сөнки балаларҙы ҡурсаларға бурыслы ололар яҡлауға мохтаж булғанда, кескәйҙәрҙең яҙмышын ышаныслы, тип әйтеп булмай.

ТУҠТА, МӘЛ!

## ТОҒРО ДУҪТАРЫБЫҘ – БАЙМАҠ КИТАПХАНАСЫЛАРЫ




## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөлә Италия Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы Илселеге делегацияһы менән осрашты. Италия яғынан делегацияны Италияның Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы Илсеһе Антонио Дзанарди Ланди етәкләй. Илсе, әгәр бизнес алып барыуға уңайлы ҡалалар исемлегендә Өфө икенсе урында булһа, Рәсәй-Италия Эш төркөмө ултырышында ҡатнашыусыларҙы йыйылы ҡабул итеүҙәре буйынса ул беренсе урын алырға тейеш, тип белдерҙе.

✓Ҡала көнө алдынан, 6 июндә, "Ижтимағи электрон гәзит" сайтында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың онлайн-конференцияһы үткәрелә. Конференция барышында, 10.00-дән 11.00-гә тиклем, ул "Ижтимағи электрон гәзит" сайтына килгән һорауҙарға яуап бирәсәк. Өфө хакимиәте башлығына i-gazeta.com сайтына ингән һәр кеше һорау бирә ала. Бының өсөн "Ижтимағи электрон гәзит" сайтының баш битендәге "Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы И.И.Ялаловтың онлайн-конференцияһы" бүлегендәге тейешле форманы тултырырға кәрәк. Һорауҙарҙы онлайн-конференцияға тиклем дә, уның барышында ла ебәрергә мөмкин.

✓12 июндә Өфөлә Рәсәй көнөнә, Салауат Юлаев көндәренә һәм Ҡала көнөнә арналған байрам саралары үткәрелә. Йола буйынса, Дуҫлыҡ монументына, Салауат Юлаев һәйкәленә сәскәләр һалыу тантанаһы үтәсәк. Ленин майҙанында Рәсәйҙең 1812 йылғы Ватан һуғышында Еңеүенә арналған театрлаштырылған тамаша көтөлә. Өфөнөң төп майҙандарында төрлө байрам программалары тәҡдим ителәсәк. Фейерверк байрамдың кульминацияһы буласаҡ, ойоштороусылар әйтеүенсә, беҙҙе быйыл былтырғыға ҡарағанда ла сағыуыраҡ һәм ҡыҙыҡлыраҡ салют көтә.

✓Өфөнөң Конгресс-холында сәнәғәт округтары һәм бәләкәй, урта бизнес өлкәһендәге хеҙмәттәшлек буйынса Рәсәй-Италия Эш төркөмөнөң XX ултырышы үтте. Был ҙур ваҡиғала 500-ҙән ашыу кеше - Рәсәйҙең 20 төбәгенән вәкилдәр һәм Италиянан 100-ҙән ашыу бизнес вәкиле ҡатнашты. Башҡортостан эшҡыуарҙары ла форумды асыу тантанаһында, түңәрәк ҡорҙарҙа һәм Эшлекле бәйләнештәр биржаһында әүҙем ҡатнашты.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ИҪӘПКӘ - БАР...

## һанға - юҡ

**14-18 майҙа Баймаҡ районында әҙәбиәт көндәре уҙҙы. Үҙәкләштерелгән район китапханалар селтәре Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылына арнап ойошторған был сараға ошо районнан сыҡҡан яҙыусылар, шағирҙар саҡырылғайны. Әҙиптәр районның ундан ашыу ауылында, шул иҫәптән Байышта Буранбай Исҡужин иҫтәлегенә үткән хәтер кисәһендә, 1-се Баймаҡ урта мәктәбендә осрашыуҙарҙа, район мәҙәниәт йортонда үткән Ғаилә байрамында ҡатнашты.**

**Сараларға баш ҡалабыҙҙан беҙ икәү, яҙыусы Таңсулпан Ғарипова менән бергә ҡайттыҡ. Ауылдар буйлап йөрөгәндә миңә яҙма рәүештә бер һорау биреп, шуға яуапты "Киске Өфө" гәзитендә баҫтырып сығыуымды үтенгәйнеләр. Һорауға яуап яҙғанда халҡыбыҙҙың "Иҫәпкә - бар, һанға - юҡ" тигән әйтеме иҫкә килеп төштө.**



"Ни өсөн башҡорт ҡыҙҙары сит милләт вәкилдәренә кейәүгә сыға? Ни өсөн ул ҡыҙҙарҙың ата-әсәһе быға үҙ ризалығын бирә һуң? Кем ғәйепле бында: ҡыҙҙар үҙҙәреме, әллә уларға өйләнмәгән үҙебеҙҙең егеттәрме? Ҡыҙҙарҙы ситкә ебәреү кәрәкме? Мәсәлән, 6-7 йыл элек "Йәшлек" гәзитендә Германияла немецкә кейәүгә сыҡҡан башҡорт ҡыҙы тураһында мәҡәлә уҡығайным. Беҙҙең кеүек сағыштырмаса аҙ һанлы милләт ҡыҙҙарының сит милләт вәкилдәренә кейәүгә сығыуы нимәгә килтерере көн кеүек асыҡ бит. Гәзиттәге шул мәҡәләне онотоп булмай. Йән әрней, көйөндөрә. Немец фашистары менән һуғышҡан олатайҙар хаҡында ла уйлайым. Һеҙ ошондай хәлдәргә ниндәй ҡараштa?"

Ысынлап та, өлкән синыф уҡыусыһы биргән был һорауға бер нисек тә битараф ҡалып булмай. Хәйер, ҡатнаш никахтар мәсьәләһе беҙҙең һымаҡ сағыштырмаса аҙ һанлы милләт өсөн һәр заманда ла мөһим булып ҡаласаҡ. Совет дәүерендә үк беҙ милләтебеҙгә ҡурҡыныс менән янаған ике күренеште атап, уларҙың береһен - эскелекте, икенсеһен ҡатнаш никахтарҙа тип танығайныҡ. Ул саҡтан алып быуат, меңйыллыҡ, иҗтимағи ҡоролош, дәүер алмашынды, әммә проблемалар тороп ҡалды. Әммә ыңғай үҙгәрештәр ҙә, берәй үк ҡатмарлы күренештәр ҙә юҡ түгел. Дөрөҫөрәге, милләтебеҙ үткән быуаттың аҙағындағы тотош ил эскән афәттән арыныуға йөҙ бороп, бөгөн эскелек айырым кешеләрҙең, айырым ғаиләләрҙең генә бәләһе булып ҡалды. Хәҙер ҡайһы бер ауылдарҙа үткән туйҙарҙа эсерерлек кеше таба алмайҙар, хатта айыҡ туйҙар үткәреү йолаға әүерелеп бара, һәр хәлдә, беҙ, башҡорттар, был афәттән ҡотолоп барабыҙ. Айыҡ туйҙар үткәреү йолаһын өйләнешеүсе йәштәр үҙҙәре башлап ебәрҙе. Иншалла!

Икенсе проблемаға килгәндә. Баш ҡалабыҙ Өфөлә башҡорт балалар баҡсалары һәм мәктәп-гимназиялары асыуҙа оло фиҙакәрлек күрһәткән зыялы затыбыҙ, хәҙер инде арабыҙҙа булмаған Мөхәмәт ағай Исҡужин Өфөлә өй беренсә йөрөп тәҙөгән исемлекте күрһәтеп, үткән быуаттың аҙағында башҡорт йәштәренең үҙ-ара өйләнешеү күрһәткесе 99 процентҡа етте, тип ҡыуанып һөйләгәйне. Был күренеште илебеҙҙә һәм донъяла барған үҙгәрештәргә, милли рухыбыҙ, тарихи аңыбыҙ күтәрелешенә бәйләп аңлатырға була. Ысынлап та, тап шул мәлдән алып ҡатнаш никахтар элеккесә үк күп һанда түгел. Әммә, бирелгән һорауҙа әйтелгәнсә, үҙгәртеп ҡороуҙар башланып, бер нисә йыл үтеүгә, беҙҙең йәштәр сит илдәргә, сит дәүләттәргә, океан аръяғына эшкә йә уҡырға китеп, донъяның башҡа милләт вәкилдәре менән никахҡа инә башланы. Шуның һөҙөмтәһендә беҙҙең арала бик күп һандағы йәһүд, әрмән, грузин, немец, инглиз, төрөк, итальян ейән-ейәнсәрле башҡорттар барлыҡҡа килде. Был аяныслы мәсьәлә хаҡында яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева бик күп тапҡыр вағытлы матбуғатта сығыш яһаны.

Һорау биреүсе уҡыусы ошо күренештең сәбәптәрен белергә теләй. Ысынлап та, кем ғәйепле бында: егеттәрме, ҡыҙҙармы, ата-әсәләрме, мәктәпме? Күптәр, әлбиттә, бында уларҙың барыһын да рухһыҙлыҡта ғәйепләй. Ошонда уҡ икенсе һорау ҙа тыуа: рухһыҙлыҡ ҡына сәбәпсеме бында? 1996 йылда мин дә ошо проблема хаҡында уйланыу һөҙөмтәһендә "Ҡыҙҙар алып киткән" тигән поэма яҙғайным. Ҡыҙҙарҙың ҡыр ҡаҙҙары кеүек теҙелешеп, ҡалаларға китеүе, шуның һөҙөмтәһендә ауылдарҙа егеттәрҙең өйләнә алмай тороу ҡалыуҙары, һаҡалдары биленә еткәнсе һаман да буйҙаҡ йөрөүҙәре бәйән ителгәйне унда. Әсәрҙә мин егеттәрҙе ошондай хәлгә дусар итеүсе ҡыҙҙарға дәғүәмде белдергәйнем һәм үҙемде ул саҡта хаҡлы һананым. Башҡалар ҙа минең фекерҙе хупланы.

Хәҙер иһә, ҡыҙҙарға хөкөм ҡарары сығарырға ҡабаланғанмын икән, тип ҡуям. Ни өсөн тигәндә, ул саҡта ауылда ҡалған егеттәрҙең күбеһе өйләнмәйенсә ҡартайҙы, киткән ҡыҙҙарҙың күбеһе ҡала ятаҡтарында кейәүгә сыҡмай ҡартайҙы. Ә бит ауылдарҙа ҡалған егеттәр - донъя көтөргә, ҡыҙҙар бала табырға эшкинмәгән өсөн, йә булмаһа, өйләнешергә кеше булмағаны өсөн яңғыҙ ҡалманы бит. Улай булғас, сәбәп нимәлә: ни өсөн яҙмыш, тормош беҙҙең йәштәрҙе айырып, ғүмере буйына бер-береһенә тилмертеп йәшәтә һуң? Милләт өсөн тыуыр балаларҙы тыуҙырмай, тыуыр йәндәрҙе ожмахта һаҡлаған ҡөҙрәт, сер нимәлә? Йә булмаһа, һорауҙа әйтелгәнсә, ҡыҙҙарыбыҙҙың сит милләт өсөн балалар тыуҙырыуының сәбәбе нимәлә? Ни өсөн башҡалар арта, ә беҙ һаман да кәмемәһәк тә, йылдам арта алмайбыҙ?

Әлбиттә, был мәсьәләгә тарихи күҙлектән ҡарағанда, төрлө сәбәптәрен табырға булыр ине. Шулай ҙа иң бәләкәй ағас ҡайҙа үҫә, тип уйлайһығыҙ? "Сәнғәт" тип аталған 400 йәшлек, 15 сантиметрлыҡ иң бәләкәй ағас Японияла үҫә икән. Бәхетиһән, был ағас үҫкән көршәктең төбө юҡ икән. Хикмәт шунда: ағастың көршәк төбөнән үҫеп сыҡҡан тамырҙарын даими рәүештә ҡырҡып торғас, ул буйға ла, арҡырыға ла үҫә алмай. Тимәк, беҙгә бөгөн һан яғынан үҫергә ҡамасаулаған төп сәбәп тарихи тамырҙарыбыҙҙан, йәшәү рәүешебеҙҙән айырылыуыбыҙға бәйле. Төптән уйлап ҡарағанда, сит илдәрҙәге, ауылдарҙағы, ҡалаларҙағы йәштәребеҙҙең хәле лә ошо факторға бәйле бит.

Аллаға шөкөр, тарихыбыҙға ҡайтыу йәһәтенән һуңғы егерме йыл эсендә күп кенә ыңғай күренештәр күҙәтелә. Хәйер, оло тарихи тәжрибәһе булған боронғо милләттәр һан буйынса артыуҙы төп маҡсат итеп ҡуймай, тиҙәр. Сөнки милләт - ул тере организм һәм уның беҙ белгәндән тыш, үҙ эске йәшәү ҡануны, эске көйләнеш механизмы барҙыр. Кем белә, бәлки йәшәйештең ошо дәүерендә һаҡланып ҡалыу өсөн ныҡ ойошҡан мобил милләт формаһы ҡулайлыраҡтыр. Ни өсөн тигәндә, беҙ һаман да тарихыбыҙҙың беҙҙе ныҡ һыҙланырға мәжбүр иткән ауазы рухында, оҙайлы депрессия кисереп йәшәгән кеүекбеҙ. Беҙҙең һаман да шатлыҡлы йырҙарыбыҙ тыумаған кеүек, тик һағышлы йырыбыҙҙы тыңлағанда ғына беҙ үҙебеҙҙе ошо милләттең бер өлөшө итеп тоябыҙ һымаҡ. Әгәр ҙә киләсәктә кешелекте оло тәбиғәт катаклизмы, Туфан һыуы ҡалҡыуы йә башҡа төрлө афәттәр көтә торған булһа (телевизорҙан көнө-төнө тылҡыйҙар, Аллам һаҡлаһын), әҙерәк ҡырылыр өсөн милләт организмы үҙенең һанын арттырмай торалыр бәлки. Кеше ни тиклем күп ҡырылһа, бының өсөн ҡайғырыусылар ҙа күберәк була бит. Мин 1996 йылда "Ҡыҙҙар алып киткән" тигән поэманы яҙғандан алып, милләтебеҙҙе үтә ныҡ борсоған ошо проблема хаҡында оҙайлы йылдар уйлана торғас, ошондай "бәлки" тигән фекерҙәргә килдем дә инде. Һәр хәлдә, үткән быуаттың аҙағында ауылдарҙан ҡыҙҙарыбыҙҙың ҡыр ҡаҙҙары кеүек теҙелешеп сығып китеп, егеттәребеҙҙең ауылда тороп ҡалып, бөгөн килеп уларҙың күбеһенең ни өсөн яңғыҙ ҡартайыуының башҡа сәбәптәрен таба алманым.

Ә бит халҡыбыҙ "Иҫәпкә - бар, һанға - юҡ" тигән һүҙҙе лә сифат зарурлығынан сығып әйткән.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфө ҡала Советы депутаттары бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең балалары өсөн йәйге лагерҙарға республика бюджеты иҫәбенә һатып алынған йүнәлтмәләр хаҡының айырмаһын түләү мәсьәләһен ҡараны. Былтыр ошондай уҡ ҡарар һөҙөмтәһендә 1290 бала өсөн йүнәлтмәләр хаҡының айырмаһы түләнгән. Быйыл йәйге лагерҙарҙа өфөләләрҙең 12,6 мең балаһы ял итәсәк, тип көтөлә. Мәктәптәрҙә ойошторолған көндөҙгө лагерҙарҙа ла шул сама бала ял итәсәк, ә 9,5 мең бала шифаханаларҙа һаулығын нығытасаҡ.Республика быйыл балаларҙың йәйге ялын ойоштороуға дөйөм алғанда 158,6 миллион һум аҡса бүлә, ә Өфө - 47,2 миллион.

✓Үҙенең карьераһын Өфөлә башлаған данлыҡлы бейеүсе Рудольф Нуриевтың бюсы Францияынан Өфөгә ҡайтарылды. Рудольф Нуриевты француз скульпторы Пьер Турен уҙған быуаттың 70-се йылдары аҙағында гипста һынландырған. Владимир Спиваков күргәнгә тиклем оҙаҡ ваҡыт бюст Париждағы антиквариат магазинында һаҡланған. Ул үҙенең табышы тураһында шунда уҡ Өфөгә хәбәр итә. Бюст кисә Рудольф Нуриев исемендәге XVIII Халыҡ-ара балет сәнғәте фестивален асыу тантанаһында Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры музейына мәңгелеккә һаҡлауға тапшырылды.

✓Башҡортостан Президенты ҡарамағындағы кадрҙар буйынса комиссия булдырыу тураһында Указ ҡабул ителде. Был - дәүләт граждан хеҙмәтенең дәүләт һәм етәксе вазифаларына, шулай уҡ республика ҡарамағындағы ойошмалар етәкселәре вазифаһына тәғәйенләү өсөн кандидаттар һайлау менән шөғөлләнәсәк коллегиаль кәңәшмә органы. Комиссия эшенә ғалимдарҙы, йәмәғәтселек вәкилдәрен, бойондороҡһоҙ экспертарҙы йәлеп итеү планлаштырыла.

✓Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт йәштәр премияһы өс тапҡырға арттырылды. Хәҙер уның күләме 150 мең һумға етте. Эштәр 1 апрелдән 1 июлгә тиклем Өфө, Ленин урамы, 10, 27-се бүлмә адресы буйынса БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығының иҡтисади программалар һәм йәштәр мәшғүллеге бүлегендә ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: 251-57-11.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Былтыр имтихан биргәндә интернетты файҙаланыу һөҙөмтәһендә 20 уҡыусының һөҙөмтәһе юҡҡа сығарыла. Был ғәҙәттән тыш хәлдәр Башҡортостан Дәүләт имтихан комиссияһының ултырышында ентекле тикшерелгән.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЛА САҠТЫҢ...

## һуңғы тантанаһы











Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары.

(Башы 1-се биттә).

Өфө районына ингән, күпселек башҡорт интеллигенцияһы йәшәгән Шамонин ауылы мәктәбендәге һуңғы ҡыңғырау тантанаһында ла ҡатнаштыҡ. Бында бер түгел, өс синыф уҡыусылары өсөн һуңғы ҡыңғырау сыңланы. Иң бәләкәй сығарылыш синыфы тип 4-се синыфтарҙы атарға мөмкин, сөнки улар башланғыс мәктәптән урта мәктәп баҫҡысына күсә. Быйыл төрлө милләттәге 25 бала тағы бер аҙымға алға атланы, бер аҙымға үргә күтәрелде. Уҡытыусылары Лариса Вәлшинаның әсәләрсә хәстәрлеге аҫтында улар дуҫ, татыу, берҙәм коллектив булып формалашҡан. Быны төрлө конкурстарҙа һәм ярыштарҙа алған төрлө кимәлдәге Маҡтау ҡағыҙҙары ла раҫлай. Икенсе яҡтан, 4-селәрҙе мәктәптең терәге тип тә әйтергә мөмкин, сөнки өлкән синыфтар бығаса төрлө мәктәптәрҙән йыйылһа, был кескәйҙәр иһә ысын мәғәнәһендә мәктәптең хужалары - улар башланғыс синыфтан алып ошо белем усағында фән үрҙәрен яулаясаҡ. Улар бөгөндән үк үҙҙәренә ошо миссия йөкмәтелгәнен яҡшы аңлай: йырларға булһынмы, бейергәме, спорттамы, уҡыуҙамы - улар һәр саҡ дәррәү, ойошторолған сараларҙың дәртләндереү төркөмө. Шуныһы күңелде йыуата - дүртенселәр мәктәп менән түгел, әлегә башланғыс баҫҡыс менән генә хушлаша. Тимәк, алдағы йылдарҙа улар менән тағы әллә күпме осрашыу форсаты сығасаҡ.

Икенсе сығарылыш синыфы - 9-сылар. Улар күп түгел - 11 генә. Ләкин ниндәйҙәр бит әле! Юҡҡа ғына тантананың башланыуын белдергән флаг күтәреү мөмкинлеген тап 9-сы синыф уҡыусылары - төрлө олимпиадаларҙа һәм конкурстарҙа еңеү яулаған Артур Бикаев менән Эдуард Ғәлиевҡа ышанмағандар. Һуңғы ҡыңғырау сыңлаған көн улар өсөн алда торған юлдарҙы һайлау көнө лә булып торҙо: бер яҡтан, кемдер уҡыуын артабан лицей-колледждарҙа дауам итергә ниәтләгәндер, кемдер тыуған мәктәбенән айырылмаҫтыр. Нисек кенә булмаһын, синыф етәксеһе Ләйсән Рәхимйән ҡыҙы Хәбибуллина уларҙы 1 сентябрҙә тағы ла ҡаршы алырға һәм ҡабат үҙ ҡанаты аҫтына йыйырға һәр саҡ әҙерләгән белдерҙе.

11-се синыф уҡыусылары өсөн был көн, ысынлап та, бала саҡ менән хушлашыу көнө булғандыр. Алда уларҙы оло тормош, яңы юлдар, яңы һынауҙар көтә. Синыф етәксеһе Ғайсина Рәйфә Фәйзулла ҡыҙы менән бергә Шамонин мәктәбе быйыл үҙенең тәүге өс бөртөк ҡарлуғасын осора. Ләкин эш һанда түгел, сифатта. Әлбиттә, бығаса был уҡыусылар баш ҡаланың төрлө мәктәптәрендә белем алһа ла, мәктәпте улар шамонинсылар булып тамамлай. Ә Шәүрә Илембәтова алтын миҙалға дәғүә итә. Әйткәндәй, алтын миҙал яҙмышын ошо көндәрҙә тапшырылған Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре хәл итәсәк тә инде...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# БЕРҘӘМ ДӘҮЛӘТ ИМТИХАНЫ...

## үҙгәрешһеҙ тиерлек ҡалды

**Берҙәм дәүләт имтихандарының төп этабы 28 майҙа старт алды. Был көндө уҡыусылар информатика, биология һәм тарихтан, 31 майҙа - рус теленән имтихан тапшырһа, 4 июнь - сит телдәр һәм химия, 7 июнь - икенсе мотлаҡ имтихан математиканан буласаҡ. 13 июнь - йәмғиәтте өйрәнеү, 16 июнь - география һәм әҙәбиәттән БДИ-лар үтәсәк. 2009 йылдан алып дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы тик БДИ формаһында ғына үткәрелеп килһә лә, уның тирәләй һорауҙар кәмемәй әле. Быйыл ул сығарылыш уҡыусыларына ниндәй яңылыҡтар алып киләсәк - был турала БР мәғариф министры урынбаҫары Владимир Аристархов, БР Мәғариф министрлығының белем һәм Берҙәм дәүләт имтихан сифатын баһалау бүлеге начальнигы Зәки Мырҙағәлин, Мәғлүмәтте эшкәртеү төбәк үҙәге директоры Андрей Блинов журналистар менән осрашыуҙа һөйләне.**

2012 йылда Берҙәм дәүләт имтихандары 13 дисциплина буйынса үткәрелә. Һайлап алынған предметтар араһында традицион рәүештә лидер булып йәмғиәтте өйрәнеү (56 процент), артабан - физика (42 процент), биология (25 процент), тарих (20 процент), химия (19 процент), информатика (15 процент) килә. Инглиз, немец, француз телдәре, география, рус әҙәбиәте буйынса Берҙәм дәүләт имтиханын һайлаусылар һаны тағы ла кәмерәк, был күренеш бөтөн Рәсәй буйынса шулай, ти белгестәр.

Былтыр республика БДИ тапшырыу мәләндә ҡағиҙәләрҙе боҙоу буйынса лидерҙар рәтенә ингәйне. Имтихан биргәндә интернетты файҙаланыу һөҙөмтәһендә 20 уҡыусының имтихан һөҙөмтәһе юҡҡа сығарылды. Бөтән был ғәҙәттән тыш хәлдәр Башҡортостан Дәүләт имтихан комиссияһының ултырышында ентекле тикшерелгән, ғәйеплеләр яуапҡа тарттырылған. Республиканың ҡайһы бер райондарында күрһәткестәрҙең уртаса Рәсәй кимәленән күпкә юғарылығы ла Рособрнадзор тарафынан шик аҫтына ҡуйылған.

Боҙоп күрһәтелгән факттар мәғариф эшмәкәрлеген көсһеҙләндерә, төплө белем алыуға ышанысты кәметә, шуға ла етди контролләү системаһын нығытыу кәрәклеге көн кеүек асыҡ. "Быйыл да металл эҙләү, телефон бәйләнешен баҫа торған ҡоролмалар, видеокамералар ҡуйыу кеүек ҡәтғи саралар ҡулланмаҡ, әммә БДИ үткәреү пункттары етәкселәрен һәм имтиханды ойоштороусыларҙы һайлауға ҙур иғтибар бирҙек, - тине был мәсьәләгә үҙ ҡарашын

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә 8-9 июндә "Startup-һабантуй" фестивале үткәрелә. Уның сиктәрендә Башҡорт дәүләт университетына Ҡазан IT-паркы экспертларының килеүе көтөлә. Перспективалы IT-стартаперҙарҙы эҙләү - уларҙың төп маҡсаты. Фестиваль программаһы ике саранан тора. IT-тармаҡты үҫтереү мөмкинлектәре һәм мәғлүмәт технологиялары өлкәһендә карьера төҙөү тураһындағы бушлай лекция һәм StartUp-һабантуй сессияһы.

✓Башҡорт дәүләт университеты Хоҡуҡ институтының бишенсе курс студенттары Таһир Мәксүтов һәм Яна Пославская VII "Минең закон сығарыу инициативам" бөтә Рәсәй йәштәр форумы призерҙары иҫәбенә инде. Таһир Мәксүтовтың эше I дәрәжә дипломға лайыҡ булды. Яна Пославская үҙенең проекты өсөн III дәрәжә диплом яуланы.

✓Бөрөнгө башҡорт ырыуҙарының береһе - Ҡаңлы ырыуы варисҭары 5 июндә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры бинаһында үҙҙәренең II йыйынын уҙғара. Ҡаңлылар йыйынында Бүздәк, Бәләбәй, Дәүләкән, Туймазы, Дүртөйлө, Кушнаренко, Благовар, Борай, Мишкә районларында, Нефтекама, Өфө ҡалаларында йәшәүсе ырыуҙаштар ҡатнаша. Йыйын 11.00 сәғәттә башлана.

✓10 июндә 12 сәғәттә Миәкә районының Илсеғол ауылы эргәһендәге Нарыҫтауҙа ерләнгән сәхәбәләр янында зыярат ҡылыу сараһы үткәрелә. Белешмәләр өсөн телефон: 89279371651

✓7 һәм 8 июнь көндәре М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында танылған драматург Наил Ғәйетбаев пьесаһы буйынса ҡуйылған "Бер мәл санаторийҙа..." исемле спектаклдең премьераһы үтәсәк. Бер мәл санаторийҙа бер нисә кешенең яҙмыш юлдары килеп киҫешә. Ләкин улар осраҡлы күршеләр генә түгел - һәр ҡайһыһы кемдеңдер яҙмышында ниндәйҙер роль уйнаған булып сыға. Был спектакль мөхәббәт һәм нәфрәт, тоғролоҡ һәм кешелеклелек хаҡында. Барығыҙҙы ла яңы премьера ҡарарға саҡырабыҙ!

✓Башҡортостанда инглиз, испан, француз, немец, ҡытай, япон һәм башҡа сит телдәрҙе белгән волонтерҙарҙы йыя башланылар. Улар 2012-2013 йылдарҙа Өфөлә үтәсәк өс ҙур ярышта - йәйге биатлон буйынса донъя чемпионатында, йәштәр командалары араһында хоккей буйынса донъя чемпионатында һәм VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарында эшләйәсәк. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 251-57-19.

белдереп БР Мәғариф министры урынбаҫары Владимир Аристархов. - Имтихан тапшырыу ҡағиҙәләренә талаптар ҙа артты, мәҫәлән, уҡыусы телефон аша ярҙам алғанда тотолһа, ойоштороусылар уҡыусыны шунда уҡ имтихандан сығарып ебәрергә тейеш. Әгәр ҙә уҡыусының ғәйебе Дәүләт имтихан комиссияһы тарафынан иҫбат ителһә, ул икенсе йылға ғына БДИ тапшырыу хоҡуғына эйә буласаҡ - сығарылыш синыф уҡыусылары, ата-әсәләр ошо мәғлүмәткә иғтибар итһен ине. Был күңелһеҙ хәл рус теле йәки математика буйынса имтиханда күҙәтелһә, уҡыусы быйылға аттестат алыуҙан мәхрүм ҡаласаҡ".

Тағы шул. Контроль-баһалау материалдарындағы мәғлүмәтте имтихан тапшырыусылар ҙа, БДИ-ны ойоштороусылар ҙа таратыу хоҡуғына эйә түгел. Бының өсөн административ штраф ҙа ҡаралған. Быйыл уның күләме түбәндәгесә: граждандарға - 3-5 мең һум, вазифалы шәхестәргә - 30-40 мең һум, юридик шәхестәргә 50-200 мең һум.

Матбуғат конференцияһында ҡатнашыусылар йәмәғәт күҙәтеүселәре ярҙамына ла ҙур өмөт бағлауҙарын белдерҙе. 18 йәше тулған һәр кем йәмәғәт күҙәтеүсеһе булараҡ, БДИ тапшырыуҙа ҡатнаша ала. Быйылдан йәмәғәт күҙәтеүселәренең вәкәләтлеге киңәйтелгән, улар имтихан ваҡытында ғына түгел, апелляцияларҙы ҡарау мәлендә ла ҡатнаша ала.

БР Мәғариф министрлығының белем һәм Берҙәм дәүләт имтихан сифатын баһалау бүлеге начальнигы Зәки Мырҙағәлин белдереүенсә, быйыл Берҙәм дәүләт имтиханында артыҡ үҙгәрештәр көтөлмәй, бары тик белемдән тыш уйынды аныҡ белдереү һәләтен асыҡлау буйынса бурыс арттырыла. Мәҫәлән, тарих буйынса контроль-баһалау материалдарында тәүге өлөштәге һорауҙар ҡыҫҡартылған, тарихи портрет яҙыу пунктында уҡыусы өс тарихи шәхестең береһен һайлап, уның тормошо, ҡаҙаныштары тураһында яҙырға тейеш. 2012 йылдың контроль-баһалау материалдары күренеп торған һәм ҡарар күҙгә күренмәгән үҙенсәлекле маркировка менән ҡапланған. Материалдар интернетҡа ҡуйылған осраҡта, был маркировкалар ярҙамында аныҡ кешене асыҡлап буласаҡ. Бер аудиториялағы БДИ тапшырыусылар һанына ла (15-тән күп түгел), БДИ тапшырыу пунктындағы аудиториялар һанына ла (15-тән кәм түгел) талаптар ҡатылланған.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*АФАРИН!*

# МӨХӘМӘТША БУРАНҒОЛОВ ТА...

## башҡа шәхестәр янында



**Ирәндек буйындағы был аҫыл ҡалала республика, Рәсәй кимәлендәге мәҙәни саралар үтеп тора. Һәм ул саралар мотлаҡ тарих битенә яҙырлыҡ әһәмиәтле ваҡиғаға арналған була. Теге аҙнала ла үтте ошондай сараларҙың береһе: БДУ-ның Сибай институтының төп бинаһы алдындағы арҙаҡлы шәхестәр аллеяһында мәғрифәтсе, сәсән Мөхәмәтша Буранғолов һыны асылыуға арналғайны ул.**

"БДУ-ның Сибай институты башҡа юғары уҡыу йорттарынан нимәһе менән айырыла?" тип һораһалар, бихисап үҙенсәлек-өҫтөнлөктәрҙе һынап сығырға мөмкин булыр ине. Студенттарҙың тәртибе, тырышлығы, маҡсатты, рухты һанлауынан башлап, халҡыбыҙ мәнфәғәттәрен шәхси мәнфәғәттәренән алғараҡ ҡуйған, балаларҙан ысын шәхес әҙерләүҙе тәүбурыс итеп йөкмәгән уҡытыусыларға тиклем - барыһы ла үҙенсәлекле, үҙенсә бында. Институттың директоры иҡтисад фәндәре докторы, техник фәндәр кандидаты Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов үҙе лә бик үҙенсәлекле шәхес. Ул институттың матди-техник базаһы, уның башҡа хужалыҡ һәм ойоштороу мәсьәләләре тураһында ғына түгел, уның рухи һәм интеллектуаль базаһы тураһында ла хәстәрләүсе уникаль һәләтле етәксе. Күп йылдар ошо белем усағына белем, ғилем һәм рух яҡтыһындары өҫтәгән профессор Вәкил Исмәғил улы Хажин да хуплаңы был фекерҙе һәм шулай тине: "Институтта башҡарылған бар эштәрҙең төп локомотивы, әлбиттә, уның директоры Зиннур Ғөбәйҙулла улы үҙе. Был йөктө бер кем дә уның кеүек тарта алмаҫ ине, тигәнгә инанғанмын мин. Быны әле институттағы тарихыбыҙҙы, шәхестәребеҙҙе ҙурлаған, данлаған тотош бер комплексҡа тағы бер ҡомарткы өҫтәлде. Ошондай ҙур эштәр халҡыбыҙҙың ҙурлығы тураһында ла һөйләй. Сибай институты етәкселегенең бөтөнләй уйламаған шәп эш эшләп, барыбыҙҙы ла хайран ҡалдырыуы бер бөгөн генә түгел. Быны быйыл физик культура һәм спорт факультетында уҡ атыу дисциплинаһы буйынса дәрес индерелде. Спорт атышы менән бер рәттән, башҡорт йәйәһенән уҡ атырға ла өйрәтәсәктәр. Уҡтан атыу, берҙән, йәш кешене физик яҡтан нығытһа, икенсенән, әлеге лә баяғы традицияларҙы һаҡлауға ла булышлыҡ итәсәк".

Тәртип һәм рух - уҡыу йортоноң бөтөн уңыш-еңеүҙәренең нигеҙе ошолор. Сөнки ошо ике игеҙәк сифат, күренеш һәр аҙымда, һәр студенттың ҡылыҡ-фиғелендә, һәр уҡытыусының һөйләгән һүҙендә. Һәм, әлбиттә, башҡа бер генә уҡыу йортонда ла булмаған бюстар һәм барельефтарҙа. Институтка килеп инһән ерҙә арҙаҡлы шәхестәр - сәсән Шәйәхмәт Сибаев, ике шағир, ике азатлыҡ көрәшсеһе - Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов, шулай уҡ әҙибәләребеҙ Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева бюстары ҡуйылған аллея ҡаршы ала. Хәҙер бына унда Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәрҙән халҡыбыҙҙың мәшһүр "Урал батыр" эпосын яҙып алған ғалим-фольклорсы, Башҡортостандың халыҡ сәсәне, билдәле драматург Мөхәмәтша Буранғоловҡа арналған таш һын өҫтәлде. Ә институт бинаһы эсендәге барельефтарҙан иһә Аҡмулла, Зәйнулла Рәсүлев, Исмәғил Тасимов, Кинйә Арыҫланов, Әхмәтзәки Вәлиди-Туған, Хөсәйен Әхмәтов, Харис Йософов йөҙҙәре ҡарай. Был һындарҙы билдәле скульпторҙар Хәйҙәр Ғарипов, Ишморат Дәүләтбаев әүәләгән. Бөйөк шәхестәребеҙҙең исемен мәңгеләштергән бындай ҡомарткылар менән тағы ниндәй уҡыу йорто йә музей маҡтана ала икән?

Ошо сараға саҡырылған ҡунаҡтар - БДУ ректоры Әхәт Мостафин, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев та был уҡыу йорто алып барған эштәргә һоҡланыуын йәшермәне. Рауил Бикбаев мәшһүр "Урал батыр" эпосынан "Ҡуҡҡа лә осор - яҡшылыҡ, һыуға ла батмаҫ - яҡшылыҡ, утҡа ла янмаҫ - яҡшылыҡ, телдән дә төшмәҫ - яҡшылыҡ" тигән һүҙҙәрҙе килтергәндә, әлбиттә, институтта атҡарылған ошо изге эштәрҙең йәш кеше тәрбиәһенә ниндәй орлоҡ һалыуын, ниндәй рух көсәреп ултыртылыуын да, атаҡлы Мөхәмәтша Буранғоловтың ошо ҡомартҡылар рәтендә урын алырға лайыҡлы икәнен дә күҙҙә тотто.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ошо уҡ көндө БДУСи-ҙың спорт майҙансығында студенттарҙың һабантуй байрамы уҙғарылды. Эй, ихлас та инде беҙҙең йәштәр! Көндөң бер аҙ ғына болоҡһоп тороуы оҫкон сәсрәтеп бейергә, моң шандауын киң далаға йәйелдереп йырларға, ҡурай тартырға, йүгерергә һәм кемуҙарҙан ярышырға бер ҙә ҡамасауламаны.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# БАЛЫҠСЫҒА ЛА ТЫЙЫУҘАР БАР

**Балыҡсылыҡ ҡағиҙәһенә ярашлы, республикала ыуылдырыҡ сәсеү осоронда, 10 июнгә тиклем, балыҡ тотоу тыйыла. Закон боҙоуҙы киҫәтеү маҡсатында ошо осорҙа тейешле структуралар тарафынан һыу яткылыктары патрулләнә.**

"Ыуылдырыҡ" операцияһы барышында бер нисә браконьер эшмәкәрлеге туҡтатылған да инде. Мәҫәлән, Иглин районының Мамаев ауылы янындағы йылғала ау менән балыҡ тотоусынан 12 килограмм балыҡ һәм ау тартып алына. Шул уҡ Иглин районында тағы ла бер балыҡсынан 5 килограмм суртан һәм 25 метр ау конфискациялана. Мәләүез районы территорияһында ла закон боҙоусы тотолған. Ул Ағиҙел йылғаһында дөйөм оҙонлоғо 240 метрға еткән 4 ау менән балыҡ тотҡан. Асыҡланған факттар буйынса барлыҡ материалдар биологик һыу яткылыктарына күпме зыян килтерелеүен асыҡлау маҡсатында тейешле органдарға ебәрелгән һәм Енәйәт кодексының "Һыу хайуандарын законһыҙ рәүештә тотоу тураһында"ғы 256-сы статьяһына ярашлы, закон боҙоусыларға ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатылырға мөмкин.

Браконьерлыкты туҡтатыу һәм республика һыу яткылыктарына зыян килтереүҙе кисектереү маҡсатында бындай операциялар дауам итәсәк.

**Эльвира ХАРИСӘНОВА,**
**БР буйынса Эске эштәр министрлығының Лицензия-рөхсәт биреү үҙәге хеҙмәткәре.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Аҙ ҡанлылыҡ



Әле яңы емешеләк, йәшелсә өлгөрөп етмәгән мәлдә бер үк күләмдә сөгөлдөр, кишер һәм әсе торма (редька) һуттарын бергә ҡушып болғатырға һәм ҡара төҫтәге шешәгә ҡойоп, нығытып ябырға. Ошо шешәне ҡамырға урап, духовкала 3 сәғәт торорға. Көнөнә 3 мәртәбә, ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Дауаны оҙаҡ ҡына дауам итергә.

### Тештәр

Тештәрҙең һыҙлауына үҙебеҙ ғәйепле, тип уйлайым. Теш араһында аҙыҡ ҡалдыҡтары ҡалһа, һеләгәйҙәге ирегән эзбиз менән тешкә таш булып ултыра. Ә таш уртты йәрәхәтләй, һыҙлау барлыҡҡа килә. Сара күрмәһәң, теш һелкенеп, төшөүе лә ихтимал. Күп кеше теше менән сәтләүек, өрөк, слива һөйәктәрен вата. Һөҙөмтәлә тештәге эмаль сатнай һәм кариес сығанағына әйләнә. Ҡаты әйберҙәрҙе йыш тешләү ҡан тамырҙарын ҡыҫа һәм тештәр тукланыуҙан мәхрүм була. Тукланыуҙа тәм-том, күмәстәр булыуы ла тештәргә зарарлы, бауыр, ашҡаҙан, эсәктәр эшмәкәрлеген дә боҙа. Төрлө йәшелсә, һөт ризыҡтары гел рационыбыҙҙа булһын. Тештәр өсөн йомортҡа һарыһындағы Д витамины, помидорҙағы С витамины файҙалы.

### Сөйәл

Йәй ойоҡ кеймәйенсә күп йөрөйһөң, сөйәлдәр сыға. Уларҙан ҡотолоу өсөн кукуруз, зәйтүн майҙарын ҡулланығыҙ. Был майҙар тирене лә йомшарта. Төнгә аяҡҡа һөртөп йәки йылы тукымаға һеңдереп кейәһең дә, полиэтилен пакет менән ябаһың, уның өҫтөнән йылы ойоҡбаш кейәһең. Иртәнсәк аяҡты һабынлы һыу менән йыуырға, сөйәлде ҡырып төшөрөргә. Сөйәлгә лимон киҫәге йәбештереү ҙә файҙа бирә.

### Үгәй инә үләне

Сәскәһе япрағынан алда сыға. Уны йыйғас, тиҙ киптерергә кәрәк. Кипкән сәскәһенән бешерелгән сәй тамаҡ төбө ауыртҡанда, тамаҡ ҡарлыҡҡанда файҙалы, йүтәлдә лә бөтәрә. Сәскәләренә япраҡтарын да ҡушып ҡайнатһаң, ашҡаҙан, бөйөр ауырыуынан, һейҙәк ҡыуығы сиренән дауалай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Беҙгә лә телебеҙҙең оҡшаш яҡтарын һәм тарихты ғына тикшереп ҡалмайынса, Иран менән киләсәктәге бәйләнештәр хаҡында нығыраҡ уйланырға кәрәк.*



СИТ ИЛДӘРГӘ БАРЫП...

**Зәлифә ҠУЛБИРҘИНА фарсы телен тәүҙә Башҡорт дәүләт университетында өйрәнә башлай. Телгә өйрәнеүҙе артабан Ирандың Теһран университетында дауам итеү мөмкинлеге тейә. Уҡыуҙан тыш, Рәсәй менән берлектә эшләгән Иран фирмаһында тәржемәсе һәм Теһран университетына ҡараған тел мәктәбендә рус теленән уҡытыусы булып эшләй. Уҡыуын тамамлап, Башҡортостанға ҡайтҡан ҡыҙ Иран иле һәм уның тарихы, мәҙәниәте тураһында һөйләй.**

# РӘХМӘТЛЕ ҺӘМ БӘРӘКӘТЛЕ ЕРҘӘ...

## йәшәү тәмен беләләр

### Ҡояш иле

Иранда таңдар иртәнге аҙан тауышы менән ата. Тәбиғәте айырыуса ҡыҙыҡлы унын. Илдең бер осонда 25 градуслы йәй булһа, икенсе осонда 25 градус һалҡынлығындағы ҡышты күҙәтергә мөмкин. Иран рәхмәтле һәм бәрәкәтле ил. Кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә үҙенсәлекле унда: такси йөрөтөүселәрҙән башлап, ҙур етәкселәргә тиклем бер-береһенә ихтирам, мәрхәмәт менән ҡарай. Кешеләр үҙ-ара татыу, иғтибарлы, ныҡ яғымлылар.

Иран ҡатын-ҡыҙҙары үҙ баһаһын юғары тота белгән матур ханымдар. Ғосманлылар дәүеренән ҡалған, тәнде баштан аяҡҡа тиклем ҡаплап торған ҡара төҫтәге чадор рәсми кейем булып иҫәпләнә. Сағыу, төрлө төҫтәрҙәге шәл-яулыҡтар уларҙың йөҙҙәренә тағы ла күркәмлек һәм нәзәкәтлек өҫтәй. Галстук тағып йөрөгән ир-ат бик һирәк. Ғөмүмән, кейемдә Көнбайыш стиленә ҡарағанда сөннәти һыҙаттар өҫтөнлөк итә. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙары ниндәйҙер сикләүҙәрҙә һәм үҙ иркенән мәхрүм булып йәшәй, тип уйлаусылар был ханымдарҙы күреү менән был уйҙарынан ҡайтыр ине. Иранда ҡатын-ҡыҙ шулай уҡ вазифалы урындарға эшкә урынлаша, машина йөрөтә, хатта араларында экстремаль спорт төрҙәренән һаналған альпинист экспедициялары менән етәкселек иткәндәре лә бар.

Ир-егеттәрҙең һау-сәләмәт икәнлеге йөҙөнә сыҡҡан. Быныҡ сәбәбе, әлбиттә, дөрөҫ йәшәү рәүеше алып барыуға, һыра-араҡы эсмәүгә ҡайтып ҡалалыр, тип уйланым. Өҫтәүенә, улар спорт менән бик дуҫтар.

Теһранда яҡынса 13 миллион кеше йәшәй. Транспорт системаһы ныҡ үҫешкән һәм яйға һалынған. Эш көнө беҙҙекенә ҡарағанда күпкә ҡыҫҡараҡ. Төшкө аш һәм намаҙ ваҡытына ял сәғәттәре бүленә. Кесаҙна һәм йома ял көндәре иҫәпләнә. Ғаиләгә, бала тәрбиәләүгә күп иғтибар бүләләр, бергәләп лимон, мандарин, фисташка, гранат ағастары күләгәләрендә ултырып сәй эсәләр, ҡыҫҡаһы, йәшәү тәмен беләләр.

### Һәр нәмәлә хикмәт бар

Иранлылар ун алтынсы быуатта исламдың бер төрөн - шығыйлыҡты ҡабул итәләр. Башҡорттар элек хаж сәйәхәтенә Бохара, Хиуа, Фарсы аша йөрөгәндәр. Иранлылар шығый булып киткәс, улар Фарсыны урап үтә башлаған, сөнки шығыйҙар менән сөнниҙәр араһында гел генә аңлашылмаусанлыҡ-низағтар тыуып торған. Иранға кемдәр генә ҡул һуҙмаған - ғәрәбтәр ҙә, төрөктәр ҙә, татар-монгол, Искәндәр яуҙары һ.б. Билдәле, Фарсы биләгән ерҙәр әлеге Иран территорияһы ере кеүек кенә булмай. Был ил элек-электән иҫ киткес бай мәҙәниәте, тарихы, һәр төрлө байлығы менән күптәрҙе үҙенә ылыҡтыра. Ул хәҙер ҙә донъя сәйәсәтендә "татлы өләш"тәр рәтендә ҡала бирә. Бәлки, ошо шығыйлыҡ арҡаһында ғына ла улар үҙҙәренең йолаларын, халыҡ хәтерен, рухи мираҫтарын һаҡлап ҡала алғандарҙыр. Әле лә шығыйҙарҙың берәй байрамына барып юлыҡһаң, уларҙың рухи кимәленең ни тиклем юғары, көслө булыуы аптырата.



### Иранда башҡорттар ҙа йәшәй

Иранға килгәс тә, төрки халыҡтары йәшәгән ауыл-ҡаласыҡтар буйлап йөрөп сығырға тырыштым. Ундағы ерле халыҡ менән аралашып, йәшәү рәүештәрен күргәс, уларҙың беҙҙең башҡортҡа ни тиклем яҡын булыуына инандым.

Иран төркиҙәре күп кенә араларға бүленеп йәшәй. Ҡашҡайлылар үҙҙәре генә өс аранан тора: дерешури, бөлөк, ғашғули. Улар XX быуат урталарына тиклем ырыу-ырыу булып йәшәгән. Ырыу башлыҡтары хандар булғанға күрә, ул осорҙо "илханиҙар дәүере" тип йөрөтәләр. Ирандың көньяҡ һәм көнсығышында бахалыу, әйнәнле, нәфәр, хорасанлы, пичагчи, теймурташ, гоудари, ҡарайи, ҡарагүҙле, кеңгерлө, ҡаратаусы, афшар, каджар исемле төрки халыҡтары көн күрә. Рәсми тел булып фарсы теленең генә иҫәпләнеүе был халыҡтарҙың туған теле бөтөүенә булышлыҡ итә кеүек.

Шулай булһа ла, улар араһында фарсы телен бөтөнләй белмәүселәр булыуы минең өсөн ҡыҙыҡ күренде. Бер ваҡыт Әхәр ҡалаһынан ҡайтып барғанда бер ғаилә менән һөйләшеп киттек. Ағай кеше уҡытыусы булып сыҡты. Ҡатыны фарсы телен белмәй. "Әйҙәгеҙ, улай булғас, һеҙ - үҙ телегеҙҙә, мин үҙ телемдә аралашайыҡ", - тиеүемә, ул, иренең бөйөрөнә төртөп: "Әллә нимә ди шул", - тип әйтеп һалды. Ысынлап та, телдәребеҙҙә уртаҡ һүҙҙәр бик күп, улар, мәҫәлән, икмәкте "ипәк" тиҙәр. Ҡорот эшләйҙәр, талҡан тарталар, ҡул тирмәндәре лә бар, ҡаймаҡ менән балды бергә ҡушып ашайҙар, умарталап бал ҡорто тоталар, айран-ҡымыҙ эсәләр, балаҫтар, ҡорамалар һуғалар. Иранда йылҡы итен ашау мәкрух һыналыуға ҡарамаҫтан, ат көтәләр. Милли кейемдәре башҡорттоҡона оҡшатып тегелгән. Шалҡан менән сөгөлдөрҙәрҙе урамда уҡ бешереп һатыуҙары ҡыҙыҡ тойолдо. Шығыйлыҡҡа күсмәйенсә, диндәрен (сөнни килеш) һаҡлап алып ҡала алғандар. Тәбиғәте лә тап беҙҙеке кеүек - ағаслы урмандары, тауҙары, шишмәләре бар. Мин Теһранға ҡайтыр алдынан был ерҙәрҙән мәтрүшкә, аҡ сәскәләр йыйып алдым.

Тағы шуныһы ҡыҙыҡ: Иранда Боджнурд һәм Бирджанд (Бурджанд) тигән ҡалалар бар. Был беҙҙең башҡорт һәм бөрйән тигәнгә ауаздаш түгелме икән? Тағы күп кенә оҡшаш ер-һыу атамалары, ҡала исемдәре осрай.

Халыҡта "Ғәмәлһеҙ ғилем файҙаһыҙ", тигән һүҙҙәр бар. Беҙгә лә телебеҙҙең оҡшаш яҡтарын һәм тарихты ғына тикшереп ҡалмайынса, Иран менән киләсәктәге бәйләнештәр хаҡында нығыраҡ уйланырға кәрәк. Ул бәйләнештәрҙе ябай архитектура өлкәһенән башлап, ике ил араһындағы көслө иҡтисади үҫешкә тиклем үҫтерергә мөмкин. Ҡасандыр уҡымышлы башҡорттоң һәр береһе фарсы телен белеүен дә иҫебеҙҙән сығармайыҡ.

### Исфаһан - ярты йыһан

Иран матур-матур тарихи ерҙәргә ифрат бай. Кашан, Йәзд, Хамедан, Тәбриз, Абияне, Масъуле, Керман, Зәнджән, Саве, Решт, Рей, Казвин, Ҡом, Мәшһәд, Кандован, Шираз, Исфаһан ҡалалары хаҡында айырым ултырып, оҙон-оҙаҡ итеп һөйләргә булыр ине. Ҡайһы бер ауылдарҙа өйҙәр тотош балсыҡтан эшләнгән. Кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә ныҡ самими. Әбүғәлисина, Хафиз, Хәйям, Сәғди кеүек оло шәхестәрҙең ҡәберлектәренә барып зыярат ҡылыу йолаһы йәшәй.

Сөннәти баҙарҙы мин Иран ҡалаларының йөрәге тип атар инем. Һаммам (мунса), идара йорто, баҙарҙар гел генә берберeһенә яҡын урынлашыр булған. Халыҡты йыйып алып, ҡарарҙар ҡабул итеү өсөн дә был бигерәк тә ҡулай иҫәпләнгән. Унда ысын мәғәнәһендә тормош ҡайнай. Сөннәти баҙарҙар үҙенә күрә ҙур музей ҙа ул.

Иранлылар сифатлы туҡланыуға ныҡ иғтибарлы. Тиҙ генә ҡапҡылап сыға торған урындарҙа ла төп ризыҡҡа өҫтәп ҡорот, ҡаймаҡ, ҡатыҡ, йәшелсә, төрлө емеш-еләктән яңы ғына эшләнгән һут, дуғ (ҡымыҙ) алырға була. Йөҙөм, өрөк-сәтләүектәрҙән дә өҙөлмәйҙәр. Күп емеш-еләктең кәмендә егерменән ашыу сорты бар. Ябай банандың ғына ла дүрт-биш төрөнән ауыҙ итергә мөмкин. Тәмләткестәрҙе йәндәре кеүек күрәләр. Борон улар хатта алтынға тиң булған икән. "Ташҡа тәмләткестәр ҡушып бешерһәң, таш менән дә туйып була" тигән әйтемдәре бар.

Бер ҡайҙа ла иҫерткес эсемлектәр һатылғанын күрмәҫһең. Клуб, дискотекалар ҙа юҡ. Йәй көнө лә яһалма боҙҙан эшләнгән ҡаяға үрмәләү, диңгеҙ тулҡындарын буйһондороп, серфинг менән шөғөлләнеү һәм башҡа күп төрлө мауыҡтырғыс спорт төрҙәре һәм уйындары киң таралған һәм йәштәр ошо рәүешле күңел асыуҙы хуп күрә. Театр, кино сәнғәте лә алға киткән.

Иранлылар үтә лә ҡунаҡсыл халыҡ. Табын кистәрендә Хафиз, Фирҙәүси шиғырҙарын уҡып, бүләктәр бирешеп, килгән ҡунаҡтарының күңелдәрен күреп, бейетеп ҡайтаралар. Ғаиләлә атай тәрбиәһе, ололарҙың абруйы бар. Атай, әсәйгә сикһеҙ ихтирам күрһәтелә. Иран һәр ҡунаҡта иҫ киткес яҡшы тәҫьораттар ғына ҡалдыра. Матур һәм тәрбиәле, юғары әхлаҡлы, ташҡом өҫтөндә рауза гөлдәре үҫтереп, хатта елдән дә файҙа ала белгән тырыш кешеләр йәшәй.

### "Аҡыллылар менән ултыр, аҡылың артыр"

Дуҫтарым тураһында һүҙ сыҡһа, гел ошо мәҡәлде иҫләйем. Төрлө илдәрҙән килеп, фарсы телен өйрәнгән студенттар менән туғандар кеүек йәшәнек. Үҙ-ара ҡытайса ла, фарсы, инглиз, ғәрәп, төрөк, японса ла аралаштыҡ. Һәр береһе үҙ тыуған мәҙәниәте, ашһыуы тураһындағы белемдәре менән ихлас уртаҡлаша торғайны. Мөмкинлек сығыу менән Иран һәм Төркиә ҡалаларына сәйәхәт иттек. Төркиә, Төркмән китапханаларында күренекле шағир, яҙыусылар менән яҡындан таныштыҡ. Зәнжән университеты профессоры Субботи тигән ағай менән дә аралашыу бәхете тейҙе. Ҡарап тороуға ябай ғына, ауыл бабайы кеүек күренгән был ағай Зәнжән университетына нигеҙ һалыусы, инглиз, француз, немец телдәрендә иркен аралашыусы ҙур ғалим булып сыҡты. Ә инде сәй артында минең менән саф башҡортса аралашыуы һәм беҙҙең халыҡ тураһында хәбәрҙар булыуы тамам аптыратты. Зәнжән университетын, үҙе һөйләүе буйынса, заманса шарттарға тап килерлек уңайлыҡтар менән төҙөтә ул. Ағай Субботи уҡыу йорто, бай китапханалары һәм музейҙары буйлап үҙе сәйәхәт ойошторҙо. Яҡты, матур был университеттан киләсәктә үҙебеҙҙә лә ҡулланырлыҡ яңы фекерҙәр менән ҡайттым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡайтыр алдынан иранлы дуҫтарым Зәйнәб менән Нәхиде "Ҡунаҡты оҙатыу" йолаһын урын еренә еткереп башҡарҙылар. Бүләк-күстәнәстәрен биргәндән һуң, изге Ҡөрьән китабын үбеп, уның аҫтынан үтергә кәрәк ине. Был йола юлдарҙың фатихалы һәм уң булыуын юрап торасаҡ икән. Ә ҡунаҡ артынан бер сынаяҡ йылы һыу һибеп оҙатыуҙың Иранға тиҙерәк именһау кире әйләнеп ҡайтыуын аңлата икәнен самолетҡа инеп ултырғас ҡына аңланым.**

✓ *"Уларҙа сауҙа һәм һөнәрселек нығ үҫешкән. Уларҙың ҡайһы берҙәре башҡаларҙың ерҙәренә килеп, үҙҙәренә кәрәкле нәмәләрҙе ала. Был уңдырышлы ил, унда үлән дә, мал да күп..."*



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының сираттағы ултырышының көн тәртибенә бер нисә мәсьәлә сығарылһа ла, Урта быуаттарға ҡараған Башҡорт (Өфө-II ҡаласығы) ҡалаһын һаҡлау, фәнни өйрәнеү һәм музейлаштырыу мәсьәләһе төп урынды алып торҙо. Инде нисәмә йылдарға һуҙылған тикшеренеүҙәр раҫлаһа ла, Башҡорт ҡалаһының йәше 1500 йыл менән билдәләнеүе, уның ысынлап булыу-булмауы ҡайһы бер тарихсыларҙа шик тыуҙыра һәм һаман да бәхәстәргә нигеҙ булып тора. Ләкин ғәрәп һәм Европа авторҙары хеҙмәттәрендә һәм карталарында билдәләнгән Башгирт, Башкерти ҡалаларының булыуын бер кем дә инҡар итә алмай. Донъя тарихы таныған ошо урта быуат ҡалаһының булыу фактын бер төркөм ғалимдарҙың танырға теләмәүен башҡорт халҡын ғына түгел, тотош Башҡортостан халҡын ата-олатайҙарҙың тарихи мираҫынан мәхрүм итергә тырышыу, тип кенә аңлатып булалыр.**

**Ултырышта ҡатнашыусылар академик Нияз Мәжитовтың һәм археолог-ғалим Филарет Сөнәғәтовтың сығышын иғтибар менән тыңланы һәм фекер алышыуҙарҙан һуң, яҡын киләсәктә БР һәм РФ Президенттарына мөрәжәғәт итеп, Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыныу датаһын билдәләү мәсьәләһе буйынса халыҡ-ара фәнни конференция ойоштороу; башҡорт халҡының тарихын өйрәнеү һәм пропагандалауҙың ҡәнәғәтләнерлек кимәлдә булмауын иҫәпкә алып, Башҡортостан Республикаһы Президентына БР Фәндәр академияһы структураһында Башҡорт халҡы тарихы институтын булдырыуҙы тәҡдим итеү; БР Фәндәр академияһына, РФ Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәгенә, БДУ-ға, БДПУ-ға һәм киң йәмәғәтселеккә Өфө ҡалаһының боронғо һәм Урта быуат тарихын, башҡорт халҡының тарихын өйрәнеүҙе фәнни нигеҙгә күсереү һәм уны әүҙем пропагандалау һ.б. тураһында ҡарар ҡабул итте.**

**Беҙҙең гәзит биттәрендә Өфө-II ҡаласығы тарихы тураһында күп яҙылды. Әммә ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тиҙәр. Шул ҡараштан сығып, түбәндә Өфө-II ҡаласығы тураһында тарихсы Салауат Хәмиҙуллиндың ошо тема буйынса аныҡ мәғлүмәттәр менән дөйөмләштерелгән мәҡәләһен тәҡдим итәбеҙ.**

# ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫНА - 1500 ЙЫЛ

## Быны донъя тарихы ла таный

### Кем тәүге тикшереүсе?

**2006 йылда Өфөнөң боронғо өлөшөндә тәү ҡарашҡа ғәҙәти булмаған ҡаҙыныу эштәре башланды. Зәки Вәлиди һәм Пушкин урамдары араһындағы кварталды реконструкциялау алдынан, законға ярашлы, уны археологтар тикшерҙе. Ябай тикшеренеү сенсацияға килтерҙе: Өфөнөң йәше быға тиклем иҫәпләнеп йөрөлгәндән өс тапҡырға олораҡ икән: уға 1500 йыл!**

**Өфө-II ҡаласығын тәү тапҡыр 1956 йылда ошо территорияға беренсе шурфтар һалыусы Петр Ищериков асҡан, тип иҫәпләнә.** Пробалы ҡаҙыныу эштәрендә ул ваҡытта әле генә Пермь университетын тамамлап ҡайтҡан йәш ғалим Нияз Мәжитов та ҡатнаша. Ул үҙенең йондоҙло сәғәтен 50 йыл көтә һәм көтөп ала - тап ярты быуаттан һуң ғына Зәки Вәлиди һәм Пушкин урамындағы кварталдарҙы реконструкциялау башлана. Тап Н. Мәжитов, хәҙер инде Башҡорт дәүләт университетының профессоры һәм академик, тәүгеләрҙән булып иртә мәҙәни ҡатламдар V быуат менән билдәләнә, тип белдерә, йәғни Өфө ярымутрауы территорияһындағы биләмә 1500 йыл самаһы элек барлыҡҡа килгәнлеген бихисап сығанаҡтар һәм документтар, археологик табыштар менән раҫлай. Бигерәк тә Мәскәү белгестәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Евразия яландарының урта быуат археологияһы төркөмө мөдире Игорь Кызласовтың эксперт билдәләмәһе баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә булды: "Монументаллеге һәм туҡтауһыҙ йәшәү ваҡыты буйынса ҡаласыҡтың бөтөн Көнсығыш Европала тиңе юҡ", - тине ул. Шунда уҡ уҫал теллеләр, Өфөнө 1000 йыллығын билдәләгән Ҡаҙандан күреп "ҡартайттылар", тип раҫлай башланы. Был, ысынлап та, шулаймы икәнлеген асыҡлап ҡарайыҡ.

### Боронғо Өфө тураһында батшалар ҙа, ғалимдар ҙа һөйләгән

1669 йылда батша Алексей Михайлович Өфөгә рус кешеләре килеп, боронғо ҡәберлектәрҙән "алтын һәм көмөш әйберҙәр һәм һауыт-һаба ҡаҙып алыуға" борсолоуын белдерә. XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Ырымбур экспедицияһының секретаре булған рус ғалимы Петр Рычков бик күп билдәле башҡорттар менән һөйләшә. Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаевтың: "Ҡаҙан ханлығының һәм башҡорттарҙың Рәсәй скипетрына буйһонғанға тиклем күп йылдар әүәл хәҙерге Өфө ҡалаһы урынында Ағиҙел йылғаһынан үргә табан Ҡариҙел йылғаһының башына һәм йылға яры буйлап урынлашҡан тауҙарға тиклем оҙонлоғо 10 саҡрымға һуҙылған бөйөк ҡала булған", - тигән һүҙҙәрен үҙенең "Ырымбур топографияһы"нда теркәп ҡалдыра. Рычков күрһәтеүенсә, Муллаҡаевтың мәғлүмәттәре 1735-1740 йылдарҙағы ихтилал ваҡытында юғалған башҡорттарҙың йылъяҙмаһы мәғлүмәттәренә нигеҙләнә.

Башҡортостандың боронғолоғон күңел биреп тикшереүсе, Өфө ҡалаһының башлығы Дмитрий Волков (1875 - 1887 йылдарҙа башлыҡ була) "Өфө губерна ведомстволары"нда: "Беҙ, нигеҙҙә, ҡала ситендә өнһөҙ ҡурғандар: күптән юғалған халыҡтарҙың һәйкәлен - күптән инде тынған көрәш шаһиттарын күрәбеҙ. Йылғалар араһындағы һәм хәҙер Өфө иркен йәйелгән барлыҡ киң майҙан кеше һөйәктәре менән тулған баҫыуҙы хәтерләтә: ҡайҙа ғына көрәк тыҡма, һәр ерҙә һөлдәләр һәм һөйәктәр... Был - кеше һөйәктәре менән ашландырылған Аллаһ яланы бында ҡасандыр оҙаҡ һәм ҡаты алыш булыуын, күп кешеләр ыҙаланыуын һәм үлеүен асыҡ һөйләй", - тип яҙа.

Случевск тауынан башланып (хәҙерге С. Юлаев скверы) телеүҙәккә тиклемгә территория тотошлайы ҡәберҙәрҙән тора. Биналар төҙөгәндә төҙөүселәр Өфө байҙарының бай ҡәберлектәренә тап була. Бихисап алтын һәм көмөш биҙәнеү әйберҙәре, һауыт-һаба, башҡа предметтар табыла, уларҙың күп өлөшө юғалып бөтә, бары тик ҙур булмаған бер өлөшө генә Милли музейҙа һаҡлана.

### Боронғо башҡорттарҙың биш ҡалаһы ул

Башҡортостандың Урта быуат ҡалалары тураһында үҙенең яҙмаларында XII быуаттың ғәрәп географы Мөхәммәд әл-Иҙриси: "...Эске башҡорттарҙың ҡалалары араһында Масра һәм Каср бар. Ике ҡала ла ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр унда һирәк була. Унда ерҙәренә һәм илдәренә килеп аяҡ баҫҡан сит ил кешеләрен үлтерәләр, шуға берәү ҙә килергә атлығып тормай. Ике ҡала ла Атил йылғаһына ҡойған йылға буйында урынлашҡан..." - тип яҙа.

Иҙрисиҙең картаһында Атил йылғаһы (йәғни Иҙел йәки Волга) Урал тауҙарынан ағып сыға, ә Каср һәм Масра ҡалалары уның уң яҡ ҡушылдығы ярында урынлашҡан. Эш шунда: боронғо грек географы Клавдий Птоломей заманынан Волганың башы тип Ағиҙел йылғаһы иҫәпләнгән. Тимәк, Ағиҙелдең уң ҡушылдығы - Ҡариҙел була.

"Эске башҡорттар"ҙан тыш, Иҙриси "тышҡы башҡорттар"ҙың өс ҡалаһын иҫкә ала: "Тышҡы башҡорттар"ға килгәндә, улар араһында Ҡараҡая, Намджан һәм Гурхан бар. Улар халҡы күп булған һәм үҙҙәрен-үҙҙәре тәьмин иткән ҡалалар. Уларҙа сауҙа һәм һөнәрселек нығ үҫешкән. Уларҙың ҡайһы берҙәре башҡаларҙың ерҙәренә килеп, үҙҙәренә кәрәкле нәмәләрҙе ала. Был уңдырышлы ил, унда үлән дә, мал да күп..."

Атап үтелгән ҡалаларҙың ҡайһыһы Өфөгә тап килеүе билдәһеҙ. Иң мөһиме, был яҙмалар Өфө-II ҡаласығын ҡаҙығанда яһалған асыштарҙы раҫлай: бында ҡара һәм төҫлө металлургия эҙҙәре табыла. Ҡаласыҡта боронғо мейес эҙҙәре, бронза ҡойолмалары, шулай уҡ металл иретеү һауыттары табыла. Боронғо башҡорт ҡалаларында металлургияның киң үҫешеүе әл-Иҙрисиҙең яҙмаларына тап килә: "...Намджан - ҡала ҡоролошо булған бәләкәй генә ҡала, уның менән төрки ҡәбиләһенән булған ир кеше етәкселек итә. Был ҡала Сукан тип аталған йылға ярында урынлашҡан. Ҡаланан көнсығышҡа табан Арджика тауы урынлашҡан, унда мендәрсә кеше эшләгән баҡыр копизары (рудник йәки карьер - **Ред.**) бар..."

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН.**
**(Дауамы бар).**



✓ *Интернаттарға ауылдарҙан иң белемле, иң көслө уҡыусылар килә, улар барыһы ла һынау биреп уҡырға инә, тимәк, бында конкуренция ла бар. Был иһә уҡыусыға артта ҡалмаҫ өсөн этәргес тә бирә.*



# АҠСА, ФАТИР, йәш кешенең белеме лә -

**Егерме беренсе быуатты кешелек ресурстары осоро тип атайҙар. Хәҙерге заманда банктағы ярайһы ғына ҙур иҫәп, ер, заводтар, пароходтар, йорттар, йәғни, килем йәки яҡын киләсәктә файҙа килтерә алған бөтөн әйберҙәр менән бер рәттән, кешенең шәхси сифаттары, белеме лә капитал булып иҫәпләнә. Тимәк, был быуат кешелек капиталы дәүере тип тә аталырға хаҡлы. Яңыраҡ мәктәпте тамамлап, һөнәр һайлау кеүек яуаплы эш алдында торған йәштәребеҙ был турала нимә уйлай? Бөгөнгө көндә йышыраҡ лидерлыҡ һәм коммуникатив һәләттәргә эйә булыусы белгестәргә өҫтөнлөк бирелгәндә, улар һөнәрҙе ниндәй критерий буйынса һайлай? Берҙәм дәүләт имтихандарының ыңғай яғы нимәлә? Ошоларҙың барыһы тураһында Республика иҡтисад лицей-интернаты уҡыусылары Фидан АБСАЛИҠОВ менән Марис ӘХМӘТОВ, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Зәһир ЗӘЙНЕТДИНОВ, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Айгөл АБЗАЛОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**▸ Һеҙ барығыҙ ҙа республикабыҙҙың алдынғы белем усаҡтарының сығарылыш уҡыусыларыһығыҙ, ошондай яуаплы мәлде ниндәй уңыштар, еңеүҙәр менән ҡаршылайһығыҙ?**

**Фидан:** Иҡтисад лицейында математика, физика фәндәрен уҡытыуға өҫтөнлөк бирелә, шулай ҙа башҡа предметтар буйынса ла яҡшы белем бирәләр. Мин үҙем башҡорт теле буйынса олимпиадалар, ғилми конференцияларҙа йыш ҡатнаштым.

**Марис:** Ысынлап та, лицейҙа алған белем кимәле юғары һәм ул беҙгә сит ҡалаларҙа олимпиадаларҙа ҡатнашырға һәм лайыҡлы сығыш яһарға ла мөмкинлек бирә. Мәҫәлән, мин быйылғы уҡыу йылында Санкт-Петербургта информатика буйынса олимпиадала ҡатнашып, үҙемде һынап ҡараным һәм уның беренсе этабын уңышлы үттем.

**Айгөл:** Мин еңел атлетика менән шөғөлләнәм, ғаиләбеҙҙә барыһы ла спорт мастерлығына кандидат, әммә һуңғы осорҙа уҡыуға күберәк иғтибар бирҙем. Быйыл Рәми Ғариповтың 55-тән артыҡ шиғырын ятлап, гимназияла беренсе урын яуланым. Ике йыл рәттән гимназияның президенты булдым һәм был эш миңә бик оҡшап ҡалды, бәләкәй саҡтан лидер булып өйрәнгәс, һис ауырлығын күрмәнем.

**Зәһир:** Бәләкәйҙән артист булырға хыялланғас, музыка гимназияһына уҡырға ингәйнем. Ҡурайҙа, пианинола, думбырала, тромбонда уйнайым, бейейем, йырлайым, отҡорҙар һәм тапҡырҙар конкурстарында, "Урал батыр" эпосын һөйләүселәр конкурстарында ҡатнаштым. Ҡыҫҡаһы, гимназияны тамамлауға маҡтау ҡағыҙҙарын байтаҡ йыйҙым. Былтыр "Крылья талантов" Халыҡ-ара бәйгеһендә - ҡумыҙ буйынса гран-при, быйыл бейеүселәрҙең "Байыҡ" телевизион конкурсында - ололар араһында икенсе урын яуланым. Ҡурай буйынса төрлө конкурстарҙа өсөнсө урынды бер тапҡыр ғына, һигеҙенсе синыфта алғайным, унан һуң беренсе урын һәм гран-при яулай килдем. "Ҡыҙыҡ мажор" тигән команда ойоштороп, быйыл "Шаяниум"да - гран-при, "Шаян уйын"да икенсе урын алдыҡ. Капитан булараҡ, командамды ошондай кимәлгә сығара алғаным менән ғорурланам.

**▸ Ошо яуланған уңыштарығыҙҙа һеҙ уҡыған уҡыу йортоноң өлөшө ниндәй тип уйлайһығыҙ?**

**Зәһир:** Бөтөн белгән һөнәрҙәремә башлап атайым, ағайҙарым өйрәтһә лә, артабан минең остазым булым уҡыу йорто торҙо. Хатта бар уңыштарымды ошо уҡыу йорто бирҙе, тип әйтә алам. Музыкаль инструменттарҙа уйнарға өйрәткән, мине ошо кимәлгә күтәргән көстәре өсөн уҡытыусыларыма рәхмәтлемен.

**Айгөл:** Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында 600-ҙән ашыу уҡыусы уҡый. Ошо 600 кешенең һәр береһе һиңә туған кеүек, уларҙың һәр береһе һинең уңышыңа ҡыуана, уңышһыҙлығыңа ҡайғыра. Шулай булғас, нисек һынатып тораһың - яҡшыраҡ булырға ынтылаһың. Уҡыуы ауырыраҡ булһа ла, уҡытыусыларыбыҙ ныҡышмал һәм тырыш булырға өйрәтте. Шуға ла минең уңыштарымда гимназиямдың өлөшө баһалап бөткөһөҙ, тип уйлайым.

**Фидан:** Ҡала, бигерәк тә баш ҡала кешегә икенсе төрлөрәк тәрбиә бирә. Бында һиңә үҙеңде күрһәтеү, һәләттәреңде үҫтереү өсөн шарттар күберәк - бына ошоноһо мөһим. Көслө уҡытыусылар белем бирә, математика, физика, башҡорт теле, рус теле йүнәлеше бигерәк яҡшы.

**Марис:** Интернаттарға ауылдарҙан иң белемле, иң көслө уҡыусылар килә, улар барыһы ла һынау биреп уҡырға инә, тимәк, бында конкуренция ла бар. Был иһә уҡыусыға артта ҡалмаҫ өсөн этәргес тә бирә. Әгәр ҙә уҡыусы үҙе теләмәһә, уҡытыусының унан отличник яһарға теләүе бер уңышҡа ла килтермәй, уҡыусы быға үҙе аңлы рәүештә барырға тейеш. Интернаттарҙа ныҡлыраҡ белем алырға була. Ауылда яҡшы уҡыусы рәтендә йөрөп, бында килгәс, "өслө"гә төшөп киткән ваҡыттар булды, хәҙер инде быларҙы көлөп кенә хәтергә алабыҙ.

**Фидан:** Ысынлап та, белем алғанда ла ярыш сәме булырға тейеш. Ауыл мәктәптәрендә бер-ике отличник була, уларҙы барыһы ла алға ҡуя, ә ҡалғандары шунда уртаҡулдар рәтендә йөрөй бирә. Улар үҙҙәре лә алдынғылар рәтенә сығырға ынтылмай, уҡытыусылар ҙа улар менән шөғөлләнеп ултырырға тырышмай. Ә бында бер тапҡыр "икеле" алһаң, уҡытыусыларың һине сәмләндерә, ошо насар билдәнде төҙәттереү өсөн ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тора.

**▸ Йәмғиәттә Берҙәм дәүләт имтихандарына ҡараштар төрлө-төрлө. Имтихандарҙың уҡыусының белем кимәлен объектив баһаламауы, уҡыусының психик торошона насар тәьҫир итеүе тураһында ла күп һөйләнелде. Һеҙҙең БДИ-ға ҡарашығыҙ ниндәй, ул һеҙҙең өсөн нимә: яҡты киләсәккә ышаныс биреүсеме, абруйлы уҡыу йорттары ишеген асыу мөмкинлеге биргән алтын асҡысмы, әллә стресс сығанағымы?**

**Зәһир:** Дөрөҫөн әйткәндә, был турала һүҙ йөрөтөүе лә ауыр, кемдер БДИ-ны ыңғай баһалай, кемдер кире фекер йөрөтә. Әммә ҡаршыһыңмы һин уға, әллә юҡмы, барыбер имтиханды тапшырырға тейешһең. Музыкант булараҡ, минең БДИ-ға ҡарашым тиҫтерҙәремдекенән айырылыр, моғайын. Беҙҙең гимназияла уҡыусылар музыка йүнәлешендә белем ала һәм улар бында артабан үҙенең тормошон музыка менән бәйләү маҡсаты менән килгән. Уларҙың барыһы ла ошо йүнәлеш буйынса юғары уҡыу йортон һайлаясаҡ. Шуға ла мотлаҡ фәндәрҙең береһе булған математиканан БДИ-ны тапшырыу беҙгә аттестат алыу өсөн кәрәк булһа ла, юғары уҡыу йортона инеү өсөн бөтөнләй кәрәкмәй, сөнки унда бөтөнләй икенсе төрлө имтихандар буласаҡ. Мәҫәлән, Өфө дәүләт сәнғәт академияһының актерҙар әҙерләү бүлегендә алты төрлө конкурс үтә. Һин уйнап та күрһәтергә, сольфеджио, гармониянан да имтихан тапшырырға бурыслыһың. Әлбиттә, урта белем биреү учреждениеһында белем алған һәр уҡыусы кеүек, музыканттар ҙа математиканы уҡый, тик БДИ тапшырыу өсөн был фәнгә ныҡлап иғтибар бүлеү кәрәк. Был беҙгә өҫтәмә көсөргәнеш кенә тыуҙыра. Икенсе яҡтан, БДИ-ға бик ыңғай ҡарайым, сөнки кеше алдан уҡ, әйтәйек, бишенсе, алтынсы, һис юғында туғыҙынсы синыфта уҡ ҡайҙа уҡырға инәсәген, уның өсөн ниндәй фәндәрҙән имтихан тапшырырға кәрәклеген уйлай һәм ныҡлап шөғөлләнә башлаясаҡ. Бына улар ысынлап та вузда имтихан тапшырыуҙан ҡотола.

**Айгөл:** БДИ-ға йәйләп ҡына әҙерләнһәң, уның бер ҡурҡынысы ла юҡ. БДИ-нан ҡурҡыу - үҙ хәлеңде насарайтыу ғына. Был йәһәттән беҙҙең гимназияла психологтар яҡшы эшләне. Дөйөм алғанда, Берҙәм дәүләт имтихандарын ыңғай баһаларға кәрәктер, сөнки, бер тапҡыр имтихан бирһәң, ҡабаттан ҡабул итеү имтихандары тапшырыуҙың кәрәге юҡ. Тимәк, БДИ эргәһендә шау-шыу күп, әммә уларҙың күбеһенә ышанырға кәрәкмәй.

**Марис:** Мин лицейҙа физика-математика йүнәлешендә уҡыйым, шуға математика дәрестәре һаны ла күп булды, махсус курстарҙа ла шөғөлләндек, йәғни имтихандарға әҙерлек тулы ҡеүәтендә барҙы. Информатика уҡытыусыһы беҙгә логиканы күберәк өйрәтте, сөнки логиканы белһәң, БДИ-ны тапшырыу еңелерәк була. Шулай уҡ стресс тыуҙырған ситуацияларҙа үҙеңде нисек торорға ла өйрәтте ул беҙгә. Әҙерлек барышында беренсе тапҡыр БДИ мәсьәләләрен барыһы ла тиерлек "икеле"гә тапшырҙы. Быының сәбәбе белем етмәүҙә түгел. БДИ мәсьәләләрен эшләп булмай, улар шундай ҡатмарлы, тигән дөрөҫ булмаған уйҙы башыбыҙға һеңдергәнбеҙ һәм беҙҙең барыбыҙҙың да тиерлек ҡурҡыштан баш мейеһе уйлауҙан туҡтаған булғандыр, тигән фекерҙәмен.

**Фидан:** Минең уйымса, БДИ - бик шәп әйбер, бер тапҡыр теге йәки был фәндән имтихан тапшыраһың да, бер юлы биш университетҡа документтар ебәреп, өйҙә генә көтөп ултыраһың. Бындай мөмкинлек ҡасан әләгер ине беҙгә? Ул стресс сығанағы тигәндәре менән тулыһынса килешмәйем, сөнки ҡурҡыуҙы был турала яҙыусы гәзиттәр, шул турала һөйләүсе телевидение тыуҙыра. Нимәнән ҡурҡырға һуң? Математиканан мәсьәләләр сисә алмауҙанмы? Улай булғас, имтихандан ҡурҡҡан уҡыусы мәктәптә ун бер йыл буйы уҡымайынса нимә ҡарап йөрөгән һуң, тигән һорау тыуа.

**Марис:** БДИ-ға әҙерләнеү уҡыусыла ихтыяр көсө тәрбиәләй. Тормошта кеше өсөн үтә кәрәкле сифаттар, мәҫәлән, тырышлыҡ барлыҡҡа килә һәм нығына.

**Айгөл:** Мотлаҡ имтихандарҙың тағы берәүһен - рус теленән БДИ тапшырыуы ла артыҡ ҡыйын түгел. Әгәр ҙә бәләкәй синыфтарҙан уҡ яҙыусылар әҫәрҙәрен уҡый килһәң, ҡағиҙәләрҙе белһәң, имтиханды уңышлы тапшырыу ауыр булмаясаҡ.

**Зәһир:** Минеңсә, рус теленән имтихан математикаға ҡарағанда ауырыраҡ, сөнки математиканан алты мәсьәләне дөрөҫ эшләһәң, "өслө"к була, ә рус теленән ҡағиҙәләрҙе, һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын белергә кәрәк. Имтихан мәлендә һинең һүҙ байлығың, күпме әҫәрҙәр уҡыуың шунда уҡ һиҙеләсәк.

**Марис:** Математиканан имтихан киңерәк һәм күберәк күләмле программаны үҙ эсенә ала. Ә рус теле дәресендә 9-сы синыфҡа тиклемге ҡағиҙәләр ятлайһың, ә 10-11-се синыфтарҙа уларҙы ҡабатлау ғына бара, шуға ла рус теленән программа тарыраҡ. Уларҙы ҡабатлап сығыуы ла еңелерәк. Бында, тимәк, һәр уҡыусының шәхси һәләттәренән сығып һүҙ йөрөтөргә кәрәктер.

*Минең уйымса, БДИ - бик шәп әйбер, бер тапҡыр теге йәки был фәндән имтихан тапшыраһың да, бер юлы биш университетҡа документтар ебәреп, өйҙә генә көтөп ултыраһың. Бындай мөмкинлек ҡасан әләгер ине беҙгә? Ул стресс сығанағы тигәндәре менән тулыһынса килешмәйем, сөнки ҡурҡыуҙы был турала яҙыусы гәзиттәр, шул турала һөйләүсе телевидение тыуҙыра. Нимәнән ҡурҡырға һуң? Математиканан мәсьәләләр сисә алмауҙанмы? Улай булғас, имтихандан ҡурҡҡан уҡыусы мәктәптә ун бер йыл буйы уҡымайынса нимә ҡарап йөрөгән һуң, тигән һорау тыуа. БДИ-ға әҙерләнеү уҡыусыла ихтыяр көсө тәрбиәләй. Тормошта кеше өсөн үтә кәрәкле сифаттар, мәҫәлән, тырышлыҡ барлыҡҡа килә һәм нығына.*

***✓ Башҡорт телен уҡытыр башҡа дәүләтебеҙ, башҡа илдә был телде уҡыр балаларыбыҙ юҡ. Шуға был имтихандың мотлаҡ тапшырыла торған имтихандар исемлегенә индерелеүен бик дөрөҫ, тип баһалайым.***



# МАШИНА ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## ҙур капитал

**Быйылғы уҡыу йылынан Башҡортостанда милли мәктәптәр уҡыусылары федераль белем биреү стандарттары тарафынан билдәләнгән фәндәрҙән тыш, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән мотлаҡ төбәк Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырҙы. Быға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?**

**Фидан:** Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән имтихан тапшырыуҙың бер ауырлығын да күрмәйем. Төрлө яҙыусыларҙың ижадына, тормош юлына ҡағылған һорауҙарға яуап биреүе бер кемдә лә ҡыйынһыныу тыуҙырмайҙыр. Эйе, уҡыу йылдарында шағирҙарҙы ла, яҙыусыларҙы ла, уларҙың әҫәрҙәрен дә өйрәнәбеҙ, әммә был белемдәр яйлап онотола төшә. Ә былай имтихан алдынан бер тапҡыр ғына уҡып сыҡһаң да, хәтергә һеңеп ҡала. Йәғни, милли мәктәпте тамамлаусы уҡыусы туған әҙәбиәт, туған тел тураһындағы белемен ҡабаттан иҫенә төшөрөп, төндә уятып һораһалар ҙа яуап бирерлек кимәлдә була. Иҫ киткес яҡшы күренеш был. Бына уны тапшырыу ваҡытын, бәлки, ҡабаттан ҡарарға кәрәктер, мәҫәлән, Яңы йыл байрамдарына тиклем башҡорт теленән имтихан бирһәң, уңайлыраҡ булыр ине. Математика һәм башҡа теүәл фәндәр менән шөғөләнергә ваҡыт иркенерәк ҡалыр ине.

**Айгөл:** Минең дә ҡарашым ыңғай, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыу бер ниндәй өҫтәмә көсөргәнеш тыуҙырмай. Физика-математика йүнәлешендә белем алам, нимәгә ул миңә башҡорт теленән имтихан, тиеүселәр бар, әлбиттә, шулай ҙа унын ыңғай яҡтарын да күрә белергә кәрәк. Гимназияны быйыл 200-ҙән артыҡ уҡыусы тамамлай, барыбыҙ ҙа иншалар яҙҙыҡ, шиғырҙар ятлап тапшырҙыҡ.

**Марис:** Был имтихан уҡыусыны рухи яҡтан үҫтереү, үҙенден милли әҙәбиәтенде яҡшыраҡ белеү, ғорурлыҡ тойғолары уятыу йәһәтенән файҙалы. Донъяны танып-белеүҙе киңәйтә ул. Башҡорт булараҡ, үҙең өсөн дә был мәғлүмәттәрҙе белергә кәрәк.

**Заһир:** Башҡорт телен уҡытыр башҡа дәүләтебеҙ, башҡа илдә был телде уҡыр балаларыбыҙ юҡ. Шуға был имтихандың мотлаҡ тапшырыла торған имтихандар исемлегенә индерелеүен бик дөрөҫ, тип баһалайым.

**Буласаҡ һөнәрегеҙҙе һәм белем аласаҡ уҡыу йортон ниндәй критерий буйынса һайланығыҙ?**

**Заһир:** Мин "алһыу хыялдар" артынан китеп барам, бала саҡтан артист булам, тигән теләгемде тормошҡа ашырыу өсөн тырышам. Өфө дәүләт сәнғәт академияһына уҡырға барасаҡмын, тик быйыл актерҙар әҙерләү факультетында башҡорт төркөмөн йыймайҙар икән, был мине бер аҙ хафаға һалды әле. Башҡа уҡыу йортонда белем алыуҙы йәки абруйлы, тип, икенсе һөнәрҙе һайлауҙы күҙ алдына ла килтермәйем.

**Айгөл:** Хәҙер БДИ һөҙөмтәләре менән теләгән уҡыу йортона уҡырға инергә мөмкин булһа ла, минең республикамдан ситкә киткем килмәй. Кеше менән аралашырға яратам. Бала саҡтан Өфө дәүләт нефть-техник университетының йәмәғәтселек менән бәйләнеш бүлегендә уҡығым килә ине, шунда документтарымды тапшырасаҡмын. Тик Заһир кеүек, минең дә икеләнеп йөрөгән сағым, сөнки был бүлектә бюджет урындар иҫәпле генә икән. Белем алыуға ваҡыт, аҡса йәлләргә ярамай, сөнки ул киләсәктә килем килтерәсәк, тиһәләр ҙә, коммерция бүлегендә белем алғым килмәй. Ата-әсәйемдең биш йыл дауамында бар тапҡан аҡсаһын мине уҡытыу өсөн генә тотоноп йәшәүен теләмәйем. Уларҙы хафаға һалмай, үҙ көсөм менән уҡығым килгәйне. Республика вуздарына уҡырға инеү мөмкинлектәренең кәмерәк булыуы эсте бошора.

**Марис:** Минең, үҙ республикамдың вуздарында белем аласаҡмын, тигән принципиаль уйым юҡ, Өфөлә уҡырға инә алмаһам, Мәскәүгә китәсәкмен. Физика, математика йүнәлешендә ситтә белем алыу хатта яҡшыраҡтыр ҙа әле. Лицейҙы тамамлаусыларҙың күбеһе Санкт-Петербургта, Ҡаҙанда, Мәскәүҙә уҡый, шуға унда миңә ҡыйын булмаҫ, тип уйлайым. Беренсе курста ныҒыраҡ тырышһаң, уҡыуы ауыр түгел, тиҙәр.

**Фидан:** Нефть, газ табыу, уларҙы эшкәртеү өлкәһендә белгес булғым килә. Был йүнәлештә белем биреүсе бынамын тигән университеттарыбыҙ бар, шуға ла мин Өфөлә ҡалыр инем. Әлегә Өфө дәүләт нефть техник университеты ҡыҙыҡһындыра, әммә бюджет төркөмөнә эләкмәһәм, Мәскәү вуздарын һайлаясаҡмын. И.М. Губкин исемендәге Рәсәй дәүләт нефть һәм газ университеты был өлкәлә иң төп вуз иҫәпләнә. Һөнәр һайлауға етди ҡараным. Бөгөнгө көндә Рәсәйҙең 70 процент килеме нефткә бәйле, был һөнәр әле генә юҡҡа сыҡмаясаҡ. Әлбиттә, республиканың тәбиғәте матур, тәбиғәт ҡомартҡылары бай, беҙҙә туризм ҙур табыш килтерә алыр ине, әммә ул әле тейешенсә үҫешмәгән. Шуға туризм менән бәйле һөнәр һайлау маҡсатҡа ярашһыҙҙыр, тип уйланым.

**Марис:** Лицейҙа кәрәкле һөнәрҙәр тураһында даими таныштырып баралар, юристар, иҡтисадсылар осоро үтте, хәҙер минең белеүемсә, программистар етешмәй. Шуға ла быйыл лицей уҡыусыларының күбеһе физика буйынса БДИ тапшыра.

**Фидан:** Башҡорт халҡында ситтә белем алыу электән абруйлы һанала. Мәскәүҙә уҡып ҡайтаһың икән, ул үҙе үк һиңә абруй өҫтәп ебәрәсәк. Әле беҙҙең уйыбыҙса, Башҡортостандан, Өфөнән ситтә бер нәмә лә юҡ кеүек, әммә атлаған һайын офоҡтар киңәйә бит ул, тау артында нимә бар икәнен белеп ҡайтырға кәрәк. Ситтә белем эстәп ҡайтһаҡ, тағы ла киңерәк фекер йөрөтәсәкбеҙ.

**Хәҙер кешелек ресурстары беренсе урында тора һәм белгестең шәхси сифаттары үҙе үк капитал булып тора, ти белгестәр. Һеҙ был фекер менән килешәһегеҙме? Һеҙгә киләсәктә ошондай белгес булыр өсөн ниндәй сифаттар кәрәк буласаҡ, тип уйлайһығыҙ?**

**Заһир:** Кеше факторы ысынлап та күтәрелә, тип уйлайым һәм шуға ла үҙемдә төрлө сифаттар тәрбиәләргә тырышам. Хәҙер уҡыу йортонан эш урынына тәғәйенләү юҡ, тимәк, йәш кеше шунда уҡ конкурентлыҡ шарттары алдында яңғыҙы ғына тороп ҡала. Ауырлыҡтарҙы еңеп сығып, эшкә урынлаша икән, был үҙе үк кешенең ниндәйҙер ихтирамға лайыҡ сифаттары барлығы тураһында һөйләй.

Эш биреүсегә яҡшы белгес кәрәк, был аңлашыла ла, сөнки ул унан күберәк файҙа аласаҡ. Бөгөнгө көндә коммуникабеллек күп нәмәне хәл итә. Шулай уҡ, тәртипле булыу, насар ғәҙәттәрҙән йырағыраҡ тороу, ҡушылған эште ваҡытында үтәү ҙә хәҙерге заманда ла, элек тә юғары баһаланған. Тағы ла һайлаған һөнәрең буйынса мөмкин тиклем күберәк белем алырға тырышырға кәрәк, үҙ эшеңдең оҫтаһы булғанда ғына, һиңә һәр ерҙә ихтирам булыр. Шулай уҡ һәләт һәм белемгә өҫтәп, маҡсатыңа ынтылыш та булырға тейештер. Был йәһәттән, бөгөнгө йәштәрҙә үҙ хыялдарына ынтылыш, үҙ-үҙенә ышаныс көслө булыуын беләм һәм уларҙың был сифаты миңә бигерәк оҡшай.

**Фидан:** Кешенең һәләте, белеме, белгән һөнәрҙәре, унын ынтылыштары, ысынлап та, кешенең капиталы иҫәпләнә. Был үҙенсәлекте иҡтисадсылар күптән билдәләгән. Бына мин киләсәктә яҡшы белгес булыр өсөн бөгөн тырышырға, сифатлы белем алырға һәм быға, әлбиттә, ниндәйҙер сығымдар түгергә, йәғни инвестициялар индерергә тейешмен. Шуға ла бөгөн беҙҙең сығарылыш уҡыусыларына белемле булыуы менән бер рәттән, һөнәрҙе дөрөҫ һайлау, хатта мәғлүмәт эҙләй һәм уны эшкәртә белеү ҙә кәрәктер, тип уйлайым. Кадрҙар бөтәһен дә хәл итә, тигән ҡанатлы һүҙҙәрҙе генә иҫкә төшөрәйек. Яҡшы кадрҙар ғына илде алға этәсәк, шуға был яуаплылыҡты бөгөн үк тояйыҡ һәм шуға ынтылайыҡ.

***Эш биреүсегә яҡшы белгес кәрәк, был аңлашыла ла, сөнки ул унан күберәк файҙа аласаҡ. Бөгөнгө көндә коммуникабеллек күп нәмәне хәл итә. Шулай уҡ, тәртипле булыу, насар ғәҙәттәрҙән йырағыраҡ тороу, ҡушылған эште ваҡытында үтәү ҙә хәҙерге заманда ла, элек тә юғары баһаланған. Тағы ла һайлаған һөнәрең буйынса мөмкин тиклем күберәк белем алырға тырышырға кәрәк, үҙ эшеңдең оҫтаһы булғанда ғына, һиңә һәр ерҙә ихтирам булыр. Шулай уҡ һәләт һәм белемгә өҫтәп, маҡсатыңа ынтылыш та булырға тейештер. Был йәһәттән, бөгөнгө йәштәрҙә үҙ хыялдарына ынтылыш, үҙ-үҙенә ышаныс көслө булыуын беләм һәм уларҙың был сифаты миңә бигерәк оҡшай.***

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Күрә белһәң, һәр нәмәнең ыңғай яғын табырға мөмкин инде ул. БДИ ҡурҡыу тыуҙырамы - яҡшыраҡ уҡы, республика вуздарында бюджет урындар аҙ икән, юғары белемде ситтә ал - был һиңә абруй ғына өҫтәр, тигән ҡараштa йәш әңгәмәселәребеҙ. Баҙар иҡтисадының үҫешкән глобаль мөхитендә предприятиелар араһындағы конкуренция аҡыл конкуренцияһы, кешелек ресурстары һәм менеджмент кимәле конкуренцияһына ҡайтып ҡалғанда, беҙгә бөгөн тап ошондай уҡыусылар әҙерләргә кәрәктер. Был һәләтле йәштәребеҙ ҙә киләсәктә илебеҙҙең иң ҡиммәтле ресурстарын тәшкил итәсәк. Ә хәҙергә уларға Берҙәм дәүләт имтихандарын уңышлы тапшырыуҙарын теләйек.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

## ЮБИЛЯРҒА ӨС ҺОРАУ



## ҺӨҘӨМТӘНЕ...
## тиҙ үк күреү мөһим

**Ошо көндәрҙә билдәле шағирә, журналист, йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл СИТДИҠОВА 60 йәшлек юбилейын билдәләй. Гәзитебеҙ йолаһы буйынса, Гүзәл Рамазан ҡыҙына бәләкәй генә өс һорау биреп, бәләкәй генә яуаптар алдыҡ. Артабан уҡыусыларыбыҙға әҙибәнең шиғырҙарын тәҡдим итәбеҙ.**

**➔ Ижад һеҙҙең өсөн нимә ул: күңел ихтыяжымы, яратҡан шөғөлмө, хоббимы? Әле нимәләр ижад итәһегеҙ?**

- Ижад -күңел ихтыяжы ла, яратҡан шөғөл дә. Күберәк балалар өсөн яҙам. Балаларҙы һәм йәштәрҙе хәстәрләп, көн дә уларҙың яратҡан мәғлүмәт донъяһы - интернетҡа инеп, бер нисә юл яҙмай ҡалғаным юҡ. Интернет ялаңында башҡорт телендә 3 төркөм алып барыуҙан тыш, Википедияла мәҡәләләр, һүҙлектәр урынлаштырам, тәрәтмәләр индерәм. Ҙур күләмле әҫәрҙәргә тотонмайым - ыһйы сәскәләренең ваҡ ҡына таждарынан да ҙур гөлләмә төҙөп була бит. Үҙемде был йәһәттән ихтыярһыҙларға яратмайым. Минә һөҙөмтәне тиҙ үк күреү мөһим. Унан, бөгөнгө тиҙлектәр заманында йәшәгән йәш быуын һөйәк ярып ултырырға ятармай, уға шунда уҡ елеге кәрәк. Оҙон-оҙон яҙма әҫәрҙәр заманы артта ҡалып бара, миненсә.

**➔ Ни өсөн, донъялар үҙгәргәс, беҙҙең милләт вәкилдәре дәррәү рәүештә дингә килмәне? Был күренешкә тарихи-психологик күҙлектән аңлатмағыҙ бармы?**

- Дин, инаныу бит һәр кемдең күңел эше. Бер быуат тиерлек дәһрилек хөкөм һөргәндән һуң, дәрестәрҙә дарвинизм тылҡынып торғандан һуң да Рәсәй халҡының дингә килә алыуы үҙе бер мөғжизә әле ул. Тарихи яктан алғанда, башҡорт халҡы мең йылдар самаһы элек үк Исламды ҡабул итә башлаған, әйтергә кәрәк, үҙ теләге менән ҡабул иткән. Был киммәттәр барыбер беҙҙең ҡаныбыҙға һеңгән. Үҙен динһеҙ һанаған ла хатта үҙен мосолманса тотоуы - ғәҙәти күренеш. Шуға ла дәррәү дингә килеү заманына күп ҡалмағандыр, тип ышанам.

**➔ Ҡатын-ҡыҙ үҙенең әсәлек потенциалын тулыһынса асырға, һаулығы еткәнсе бала табырға бурыслы. Һеҙ был бурысығыҙҙы тулыһынса үтәй алдығыҙмы?**

- Заманыма ярашлы, үҙ мөмкинлегемә ярашлы, бурысымды үтәнем тип әйтә алам. Ҡыҙыбыҙ, улыбыҙ бар. Балаларыбыҙҙың балалары күберәк булыуын теләйем. Әлегә ике ейәнсәребеҙ, бер ейәнебеҙгә ҡыуанып йәшәйбеҙ. Аллаһы Тәғәлә уларҙың ғүмерен, бәхетен-тәүфиғын бирһен.

ЗАУЫҠ

*Гүзәл СИТДИҠОВА*

# ЗАРУР БАРЫ ИНАНЫУЫҢ -

## Бар ул ҡояш, ҡояш бар ул!

### Тау ҡыҙы

Мин - тау ҡыҙы.
Таштар - сәңгелдәгем.
Тауһыҙ ҡалһам - үкһеҙ бер йәтим,
Ҡаяларҙа ҡанат нығытҡанмын -
Тау артырға тауҙар өйрәтте.
Яраланһам, аумай ҡалыр уйҙан
Тауҙарыма арҡа терәттем,
Дауыл сыҡһа, ташҡа әүерелеп
Йығылмаҫҡа тауҙар өйрәтте.
Яҙа баҫһаң, улар ярлыҡамай,
Ғүмереӊ менән хатта түләтер,
Ҡарурмандар, ҡая таштар аша
Юл табырға тауҙар өйрәтте.
Ғәрәсәттә унда ышыҡ таптым,
Ел ҡаҡтырмай ғәййәр-ғәйрәте,
Кәрһеҙерәк менән мохтаждарҙы
Ҡурсаларға тауҙар өйрәтте.
Тауҙан-тауға йөрөр шандаҡ кеүек
Күңелемде ғәйбәт көйрәтте,
Саф шишмәләр менән йәшем йыуып,
Бирешмәҫкә тауҙар өйрәтте.
Тауҙа тыуғас, тауҙа - ҡорған оям,
Тауҙан - илһам, тауҙан - көй-дәртем.
Турғаймындыр, бәлки, тик - тауҙыҡы,
Күк иңләргә тауҙар өйрәтте.

### Мәңгелек

Яр буйында баҫып торам,
Уйым уйға бәйләнә:
Ерҙең быуы нисә быуат
Әйләнә лә әйләнә...
Тилбер шишмә, талғын йылға,
Күлдәр, диңгеҙ, океан.
Ә күктәрҙә болот йөҙә -
Гүйә ап-аҡ таҡыя.
Ерҙән - күккә, күктән - ергә
Йән, йәм биреп аға һыу.
Мәңгелектән килгән һыу бит...
Күҙаллаһаң - яманһыу.
Тәү Атабыҙ, Тәү Инәбеҙ
Эскән һыуҙан яралған,
Ер йомғағын урап сығып
Бөгөнгө һыу таралған.
Ҡәҙимгенең, бөгөнгөнөң
Ҡушылған бергә һуты:
Кемдең тире, ҡаны, йәше...
Шул дымда - донъя ҡото.
Нисә дәүер, нисә милләт -
Һәммәһенән бар мая.
Тик һыу һаман йәп-йәш ҡала...
Бәндә генә ҡартая.
Яр буйында баҫып торам
Керпегемә йәш элеп -
Быйылғы боҙ булып, һыуҙан
Ағып килә мәңгелек.

### Мираҫ

Ергенәһе ҡәҙерле бит
Баһалы бит халҡыма
Күккә осҡанда ла, ерҙән
Ҡеүәт алып ҡалҡыма.
Ни кисерһәк - еребеҙҙә,
Халҡым һүҙенән беләм:
Ул - йығылып ятып илай,
Тәғәрәп ятып көлә.
Бәхете лә - ошо ерҙә
Ләхете лә - ошонда,
Ҡанбаба ҡаны һуғарған
Урал тигән йортонда.
Ҡайғылары еңелерәк
Шатлыҡтары татлыраҡ
Ҡараңғы төн - яҡлаусыһы,
Ә ҡояшы - яҡтыраҡ.
Беҙ бахыр, тимәгеҙ аслан -
Был һүҙҙәр төптә ялған.
Ерҙән дә ҙур мираҫ бармы
Олатайҙарҙан ҡалған?!
Кендек бауым күмелгән ер!
Күмелеп беркетелгән.
Һинә йығылып илайым,
Һиндә тәгәрәп көләм!

### Өй йылыһы

*Тәүге шиғырҙарымдан*

Шәм янһа ла - өй ҡараңғы,
Мейестә йылы тормай,
Көнгә нисә йыйыштырып
Бүлмәбеҙгә ҡот ҡунмай.
Төсһөҙ көндәр: ай-ҡояшһыҙ,
Әллә таң, әллә энер.
Эшебеҙҙең йәмдәре юҡ -
Әсәйем өйҙә түгел.
Ул яраштырған - иң затлы,
Тәмдәре лә мул икән,
Өйөбөҙҙөң яҡтыһы ла,
Йылыһы ла ул икән.
Ҡайнап ҡына сыҡҡан көйө
Ниңә һыуыҡ аш-сәйем?!
Йорт усағы - мейес түгел,
Үҙе икән әсәйем!

### Инәйҙәр

Әберкәле күлдәк, бәрхәт камзул,
Ап-аҡ ойоҡ, кизе яулыҡтар,
Аҙымдары еңел, танып киләм,
Инәкәйҙәр - беҙҙең халыҡтан.
Ҡараштары сабыр, һөйкөмлекле,
Көләүҙәре шундай ягымлы,
Ябайыраҡ кеүек, алсағыраҡ
Инәйҙәре тыуған ягымдың.
Индәренә һуғыш йөгөн һалған,
Көндәренә йылдар тинләйҙәр.
Ә зарҙарын беҙ ишеттек һирәк.
Инәкәйҙәр, түҙем инәйҙәр.
Атын еккән, иген иккән улар,
Шәл бәйләгән, киндер иләгән.
Ҡулдарынан ниндәй эш килмәйҙәр!
Инәкәйҙәр - уңған инәйҙәр.
Тәмле ашы, тәмле һүҙе менән
Ҡаршы алыр: Әйҙүк, ин әйҙә!
Һорап алмаҫ, әммә һораттырмай
Һуңғы телемдәрен бирерҙәр
Инәкәйҙәр - беҙҙең инәйҙәр.
Һеҙ лайыҡлы ине мул тормошҡа,
Ә ул муллыҡ китте эт-ҡошҡа,
Тик шунда ла һис зар түкмәйһегеҙ
Хеҙмәтебеҙ китте, тип, бушҡа.
Рәнйеһәгеҙ, төшөр рәнйешегеҙ,
Ҡарғаһағыҙ, төшөр ҡарғыштар,
Тик һаман да сабыр итәһегеҙ,
Шөкөр итәһегеҙ яҙмышҡа.
Шөкөр итеү менән бәхетле һеҙ,
Алтынығыҙ - бары сабырлыҡ,
Эй байнығыҙ ошо алтындарға -
Юлығыҙға түшәп һалырлыҡ.
Әлдә Хоҙай һеҙгә түҙем биргән,
Йәшәй беләһегеҙ алғышлап.
... Рәнйеһәгеҙ - төшөр рәнйешегеҙ,
Ҡарғаһағыҙ - төшөр ҡарғыштар.
Хаҡығыҙ бар...

### Аҡ күлдәк

Аҡлы ғына күлдәгемә
Таптар төшһә - күренә,
Быҫраҡ баҫһа бар донъяны,
Быҫраҡ уҙа түреңә.
Кер күтәрмәҫ булған өсөн
Аҡҡа хөрмәт юҡ инде.
Әрһеҙерәк, ҡараңғыраҡ
Туҡымаға юл инде.
Өҫтәремә кейер инем--
Аҡ күлдәгем йәл генә.
...Кергә батҡан илде баҫты
Кер күтәрер йәнлеләр.

### Ышаныслым

Һайлауҙарҙа "доверенный"мын, тип
Көлгәнең бар - хаҡтыр тик өләшә,
Аллаһ һине ышаныслым иткән
Ғүмер юлын бергә үтер өсөн.
Һөйөклөм, тип әйттең, мин ышандым
Көҙгөләге һынды һанға һуҡмай,
Мин, моғайын, ҡайтыш булыр инем
Урталыҡта ҡала алмай, юҡһа.
Һай ул, тинең, кисер диңгеҙемде
Ышандым да аша атлап сыҡтым,
Дошманымдың көсһөҙ булғанына
Инандырҙың, уны ергә йыҡтым.
Мин донъянан бер саҡ киткәйнем бит,
Ә һин ҡайтыр юлға ишек уйҙың:
- Ярап кескәй генә, - тигәнеңә
Ышандым да терелдем дә ҡуйҙым.
Йылы тиһәң, яндым һыуыҡтарҙа,
Яланаяҡ уҙа алдым боҙҙан,
Баҙрап ятҡан күмер өҫтәренән,
Һыуыҡ, тиһән йүгереп кенә уҙам.
Һин ҡалҡанһың уҡтар атылғанда,
Хәлдән яҙғанымда - көслә ҡанат,
Мин таяндым һиңә, яҙмыш еле
Киҫә һуҡҡанында ҡабат-ҡабат.
Һуңғы сырағыма ҡалғанда ла
Осҡон һалып ҡабыҙыуың ысын.
... Мөмкин үҙ-үҙемә ышанмауым,
Тик ышанам һиңә, хәләл дуҫым.

### Ҡомға яҙылған сер

Серҙәремде яҙам ҡомға,
Йәшер(ә)лыр ҡомдар ғына,
Күңелдә шар асып ҡуям
Бары төндәр ҡосағына.

Бар серҙәрем һарҡты ярға.
Ҡыҙыл энер. Һағыш - кисем.
Ҡомға яҙған серҙәремде
Тулҡын йыуып алып китте.

Һин һорама ни яҙғанды,
Ни илатҡан, йыуатҡанды,
Улар һыуға ағып төштө
Күңелдә тик йөйө ҡалды.

Йөйө ҡалды, уналманы,
Кәмемәй ҙә икән һаны.
Яраларым шундай әрней...
Һыу өҫтөндә - энер ҡаны.

### Йөрәгем гөлләмәһе

Берәүҙәрҙе яҙҙар күккә сөйә,
Баш эйҙертә мине тупраҡҡа,
Тарап-тарап ергә орлоҡ һалам,
Өмөт-мая баглап көҙ яҡҡа.
Ҡырауҙарҙан ҡурсый йән йылыһы,
Йөрәк ҡаны менән һуғарам,
Ергенәйем түлһеҙ ҡалмаһын тип
Эш аттарын һирәк туғарам.
Сәскәләрем бөгөн тажын асҡан,
Һөйөнөшөп бағып күктәргә,
Һәр береһе емшән үҙгенә
Йөрәгемде һалып күтәргән.

### Өмөт

Көн ҡояшһыҙ, тимәһәңсе,
Ҡояш сыҡмай көн һыуамы,
Күкте болот ҡаплағандан
Бер ҙә уҙмаҫ төн буламы?..
Яҙмыш яҙған һәр көнөндә
Ҡояш балҡыу түгел зарур.
Зарур бары инаныуың -
Бар ул ҡояш, ҡояш бар ул!

### Яҙғы төн

Әрмәнделәр төндә көй һуҙалар
Һандуғастар менән уҙыштан,
Улар ҙа бит Хоҙай хөкөмөндә -
Йәндәренә хистәр тулышҡан.
Һандуғаскай моңо илата ла,
Әрмәндекәй күңел йыуата -
Мөхәббәттән бер кем мәхрүм түгел,
Йәне барҙар йән тип йән ата.
Үҙ мондары үҙҙәренә таман,
Үҙ төҫ-һыны йәмле үҙенә,
Түл йәйергә ергә яратылғас,
Әрмәнде лә өҙөләп-өҙөлә.
Һөйөү - батша!
Моңһоҙ моңо менән
Әрмәнделәр йырлай ойотоп.
Йыһан дирижеры буйһондорған
Яҙ төнөнөң һанһыҙ дуэтын.
Ҡануны шул - хатта әрмәнде лә
Йәшәтергә теләй үҙ затын!
...Абортарий тәҙрәһенән ҡарап
Өнһөҙ генә илай бер ҡатын.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "УРАЛ МОҢО"...

## рухи бәйләнеште нығыта

**Үткән аҙнала республика сәнғәт донъяһының төп иғтибары Халыҡ-ара төрки йәштәренең "Урал моңо-2012" конкурс-фестиваленә йүнәлтелде. Быйыл ун алтынсы тапҡыр уҙған был сараға Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм яҡын сит илдәрҙән төрки телле халыҡ вәкилдәре йыйылды.**

Туғандаш халыҡтарҙың бергә йыйылып, йыр-моң иленә сәйәхәт ҡылыуы, бер-береһенең ижады һәм мәҙәниәте менән танышыуы, йырҙарын тыңлауы, һис шикһеҙ, кәрәкле һәм әһәмиәтле эш. Быңдай мәҙәни бәйләнеш ижадсыларҙың үҙҙәренә лә, тамашасыға ла кәрәк. Йырсы башҡаларҙы ишетеп, үҙенең башҡарыу кимәлен һәм оҫталығын баһалаһа, тамашасы бер төрлөлөктән арынып, яңы мәҙәни һулыш алыу мөмкинлегенә эйә. Төрки телле халыҡтарҙың йыр ижады халыҡсанлығы һәм моңло булыуы менән башҡаларҙан айырылып тора. Ике көн дауамында барған һайлап алыу турҙары һөҙөмтәһе буйынса жюри ағзалары финалға иң талантлы һәм оҫта башҡарыусыларҙы сығарғандыр. Ә шулай ҙа Гала-концертта һуш китеп, онотолоп тыңларлыҡ, хайран ҡалырлыҡ башҡарыусылар булманы, тиерлек. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙҙең республика исеменән сығыш яһаусы конкурсанттарға ла, башҡа төбәктән килеүселәргә лә нәҡ халыҡсанлыҡ етмәне. Был йәһәттән бары тик Башҡортостандың "Арғымаҡ" төркөмө, Тыва һәм Саха-Яҡут Республикаһы вәкилдәре генә уңышлы сығыш яһаны, тип билдәләргә мөмкин. Йырсының ижадында нәҡ ошо халыҡсанлыҡ, милли сағылыш, моң булмаһа, милли кейемгә һәм уйын ҡоралына ғына баҫым яһап, тамашасы күңелен яулап булмай. Беҙҙә иһә һирәк осрай торған таланттарҙы ошо халыҡсанлыҡтан айырырға тырышыу көслө һымаҡ. Һуңғы ваҡытта халыҡ йырҙарын башҡарыусыларға ҡытлыҡ булып китеүенең сәбәбе лә ошолор, моғайын. Ә бит бөгөн бөтә донъя сәнғәтендә күҙәтелгән милли фольклорҙың һәм заманса музыка индустрияһының синтезын, бер-береһенә булған йоғонтоһон инҡар итеп булмай. Шулай уҡ уны ҡабул итмәҫкә тырышыу ҙа, баш тартыу ҙа дөрөҫ булмаҫ ине. Ләкин быңдай синтез юғары кимәлдә башҡарылғанда һәм өҫтөнлөк милли яҡҡа күберәк бирелгәндә генә тамашасы күңеленә юл табырға мөмкин. "Урал моңо" нәҡ ошо юлдан бара, ләкин быйылғы фестивалдә ҡатнашыусылар араһында был синтезды профессиональ кимәлгә еткереүселәр күренмәне. Вокал ансамблдәр араһынан Өфөнән "Латин кварталы" ошо юҫыҡта сығыш тәҡдим итте, ләкин юғарылыҡҡа өлгәшә алманы. Эйе, профессионаллек кенә түгел, башҡорт халыҡ йырын башҡарғанда рух та, матур тел дә кәрәк бит әле. Ә бына фестивалдә ҡунаҡ булараҡ сығыш яһаусы Айҙар Хәмзиндың сығышын уңышлы, тип билдәләп үтке килә. Уның оригиналь аранжировкала эшләнгән башҡорт йыры заманса һәм сағыу яңғыраны, шул уҡ ваҡытта йырсының ижадында милли нигеҙҙең ныҡ булыуы ла асыҡ сағылды.

Йырға тәржемә кәрәкмәй. Ләкин халыҡ тарафынан уны аңлау, ҡабул итеү һәм яратыу өсөн ижадсы йырға бар күңелен һалып, халҡының бар булмышын тойоп, тыуған еренән рухи көс алып, туған теленең бар һутын һәм матурлығын аңлап башҡарырға тейеш. Өс минутлыҡ йырҙа ла ул халҡының күңел кисерештәрен күрһәтергә, уй-фекерҙәрен әйтергә бурыслы. Әгәр ҙә ошолар булмаһа, күпме көсөн һәм оҫталығын һалмаһын, профессиональ йәһәттән нисек кенә дөрөҫ йырламаһын, йыр тамашасы йөрәгенә юл тапмаясаҡ. "Урал моңо"нан халыҡ нәҡ ошондай таланттарҙы, яңы балҡыштары менән ғәжәпләндереүсе башҡарыусыларҙы көтә. Ләкин быйылғы фестиваль ундай исемдәргә бай булманы. Гран-при яулаусы ҡаҙаҡ егете Нурбол Балапанов уңышлы сығыш яһаһа ла, йәшлегенә барып булһа кәрәк, йырын йөрәгенән сығарып халыҡ күңеленә еткерә алманы. Быңдай юғарылыҡҡа бары тик конкурс сиктәренән тыш сығыш яһаусы Марсель Ҡотоев ҡына етте, тип әйтергә булалыр. Ә шулай ҙа сарала ҡатнашыусыларҙың да фекерен беләйек әле.





**Рукият Иразутдинова, Дағстан Республикаһының Буйнаҡ районы мәҙәниәт үҙәге директоры, жюри ағзаһы:** Тамырҙарыбыҙ берлеге менән ғорурланам, рухи һәм ҡан туғандарҙың күп булыуына ҡыуанам. Беҙ үҙенсәлекле халыҡ һәм, тәү сиратта, беҙгә ошо үҙенсәлегебеҙҙе һаҡлап ҡалырға тырышырға кәрәк. Оҙаҡ йылдар уңышлы барған "Урал моңо" фестивале нәҡ ошондай бурыстарҙы үтәй ҙә инде. Ләкин төрки телле халыҡтар вәкиле булараҡ, күптәрҙең үҙ телен онотоуы, мәҙәниәтенән ситләшеүе, халҡының үткәненә ҡул һелтәп, киләсәгенә битараф булыуы хәүефләндерә мине. Быңдай күренеш, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер халыҡты ла урап үтмәй. Үҙенең телендә һөйләшергә оялған, туған телендә китап уҡымаған, халҡының йырҙарын тыңламағандар бар арабыҙҙа. Был бик аяныс. Беҙҙең һәр беребеҙ үткәнгә әйләнеп ҡарарға һәм киләсәк быуынға нимә ҡалдырасағы хаҡында уйларға бурыслы.

**Нурбол БАЛАПАНОВ, Гран-при яулаусы, Ҡаҙағстан Республикаһы:** Мин беренсе тапҡыр Халыҡ-ара конкурста ҡатнашам һәм ошондай юғары урынға лайыҡ булыуыма ифрат шатмын. Шулай уҡ үҙемдең йыр-моң конкурстарына юлымдың башы нәҡ гүзәл Башҡортостан ерлегендә булыуына ла ҡыуанам. Башҡортостан миңә үҙенең һоҡланғыс тәбиғәте, алсаҡ йөҙлө кешеләре, йәшеллеге менән мәңгелеккә күңелемдә уйылып ҡалды. Матур ерҙә матур күңелле кешеләр тыуа. Фестиваль көндәре барышында быға тағы ла бер инандым, сөнки бындағы кеүек һәйбәт мөнәсәбәтте бик һирәк осратырға була. Иғтибарлы һәм ихтирамлы халыҡ йәшәй һеҙҙә. Концерттарға килгән тамашасы алҡыштарын йәлләмәй, ихлас ҡул сабыуҙары менән ҡатнашыусыларҙың күңелен күтәрҙе. Йырсы өсөн тамашасы битарафлығы иң ҡурҡынысы. Ләкин Өфө сәхнәһенә сығыусы һәр конкурсант үҙенә ҡарата йылы ҡараш тойҙо. Бына ошондай ваҡытта күренә лә инде төрки халыҡтары берҙәмлеге һәм туғанлыҡ хистәренең ныҡлығы.

**Азат САФИН, тамашасы:** "Урал моң"он ҡарарға махсус рәүештә районддан килдем. Һайлап алыу турҙарын ҡарарға мөмкин икәнлеген белһәм, алданыраҡ та килгән булыр инем. Үҙем тарих уҡытыусыһы булараҡ, төрки телле халыҡтар хаҡында ҙур ҡыҙыҡһыныу менән төрлө мәғлүмәт эҙләйем һәм туплайым. Тәү сиратта, минең өсөн телебеҙ оҡшашлығы ҡыҙыҡ һәм фестивалдә төрлө төрки телле башҡарыусыларҙың йырын мауығып тыңланым. Тырышҡанда йырҙың йөкмәткеһен тулыһынса аңлап та була хатта.

Тарихы беҙҙең эраға тиклемге III быуатҡа барып тоташҡан халыҡтарҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге ошо фестивалдә ҡатнашырға һәм тамашаны ҡарарға килгән йәштәр ҡулында. Улар үҙҙәренең тарихын, телен, мәҙәниәтен белергә һәм һаҡларға бурыслы. Үҙенең тамырҙарынан ситләшкән халыҡтың киләсәге хәүефле, ә ошондай фестивалдәр үткән менән рухи бәйләнеште нығыта, киләсәккә аҡ юл һала. Шуға күрә, "Урал моңо"ның төрки халыҡтары араһындағы рухи һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе нығытыуҙағы ролен юғары баһалайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Төркиҙәрҙең сәнғәте үҙенсәлекле феномен һәм милләттәрҙең традицион фекерләүе һәм үҙаңы менән тығыҙ бәйләнгән күренеш. Ул массалы мәҙәниәттең бер өлөшө лә, шул уҡ ваҡытта ҙур сәхнәгә төрки халыҡтарының этник һәм мәҙәни традицияларын ылыҡтырыусы ла булып тора. Шуға күрә, "Урал моңо" кеүек фестивалдәрҙең мөһимлеген инҡар итеп булмай. Фестиваль төрки халыҡтарының йолаларын һәм сәнғәтен пропагандалаусы, милли сәнғәтте киң массаға еткереүсе йырсыларға ижади юл асыуы менән дә оло баһаға лайыҡ. "Урал моңо"на килеүсе һәр йырсы үҙенә фәһем, ижади йүнәлеш алып, фестиваль һөҙөмтәләренән кәрәкле һығымталар эшләп таралғандыр, тип ышанайыҡ.**

Гөлназ САФУАНОВА.



Юлай КӘРИМОВ фотолары.

ИНТЕРНЕТТАН



## СӘНҒӘТ ӨЛГӨЛӘРЕ...

### бәхетле итә

■ Донъяла әллә күпме кеше кальцийлы өҫтәмәләр ҡабул итә. Әммә яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, кальцийҙы даими ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре барлыҡҡа килеү хәүефен ике тапҡырға арттыра икән. Белгестәр әйтеүенсә, бөгөн бер Бөйөк Британияла ғына бындай өҫтәмәләрҙе яҡынса 5 миллион кеше ҡабул итә. Сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау һәм ауырыуҙарҙы иҫкәртеү һөҙөмтәһендә атеросклероз, гипертония, остеопороз һәм башҡа сирҙәрҙе булдырмаҫҡа тырышыусылар һаны көндән-көн арта. Шуға ла АҠШ һәм Европа илдәрендә организмды тонуста тоторға ярҙам итеүсе өҫтәмәләр ҡабул итеү ғәҙәти хәл иҫәпләнә. Тик улар ысынлап та хәүефһеҙме һуң? Германия һәм Швейцария ғалимдарының 11 йыл дауамында үткәргән тикшеренеүҙәрендә урта һәм оло йәштәге 24 мең кеше ҡатнашҡан. Эш тәрлә яҡлап алып барылған, әммә шул да асыҡланған: даими рәүештә кальций ҡулланыусыларҙа йөрәк өйәнәге хәүефе ике тапҡырға юғарыраҡ булып сыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта рәсми медицина кальцийҙың тәүлек нормаһы (700 мг) бер зыян да итмәүен, ә уны артығыраҡ ҡулланыу эс ауыртыуына һәм диареяға ғына килтереүен раҫлай.

■ Британия тикшеренеүселәре фекеренсә, төрлө проблемаларҙан ҡотолоу өсөн картиналар галереяһына йыш йөрөү ҙә етә. Бигерәк тә донъя һынлы сәнғәте шедеврҙары кеше психикаһына ыңғай тәьҫир итә. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙәр күрһәтеүенсә, Клод Моне йәки Сандро Боттичелли кеүек бөйөк рәссамдарҙың һүрәттәрен ҡараған саҡта кешенең баш мейеһе әүҙемләге кеше ғашиҡ булғандағы мейе торошона оҡшаған була. Бынан тыш, тикшеренеүҙә ҡатнашыусыларҙың ҡанында домафин гармоны ла күберәк була, был гормон кеше ниндәйҙер кинәнес кисергәндә бүленә. Бындай реакция тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусының һәр береһендә күҙәтелә. Эксперттар әйтеүенсә, сәнғәт өлгөләре ҡурҡыу, тынысһыҙланыу кеүек тойғоларҙан арыныға һәм хатта ауыртыуҙан ҡотолорға ярҙам итә.

■ Ауырлыкты нормала тотоу өсөн күпме түгел, ҡасан ашыу мөһимерәк, ти Солк биологик тикшеренеүҙәр институты ғалимдары. Сысҡандарҙа үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙә тәүге төркөмгә көндәҙ, 8 сәғәт дауамында ғына туҡланырға мөмкинлек биргәндәр. Икенсе төркөм тәүлектең һәр өлөшөндә лә туҡлана алған. Тәүге төркөмдәге сысҡандар икенсе төркөм менән бер үк күләмдәге азыҡты ашап бөтһә лә, уларҙа һимереү һәм башҡа метаболик ауырыуҙар теркәлмәгән. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һимереү азыҡ ҡабул итеү графиги һәм организмдың биологик сәғәттәренең тура килмәүе менән бәйле.

■ Иҡтисади хеҙмәттәшлек һәм үҫеш ойошмаһы иҫәпләп сығарыуынса, "яҡшы тормош индексы" буйынса иң юғары балды Австралия алған. Был ойошма илдәр рейтингында ғүмер оҙайлығы, килем, хәүефһеҙлек, эшһеҙлек дәүмәле һәм башҡа критерийҙарҙы иҫәпкә ала. Быларҙың барыһы ла кеше тормошонон сифатын формалаштыра. Австралияла уртаса ғүмер оҙайлығы 82 йәш тәшкил итә, 15-64 йәштәге граждандарҙың 72 проценты эшләй, эшһеҙлек (башҡа илдәр менән сағыштырғанда) 5 процент кимәленә еткән. Аналитиктар раҫлауынса, "йәшел континент" донъя иҡтисади көрсөгөнән сығыусы илдәр араһында ла беренсе буласаҡ.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА...

**"Вконтакте", "Фейсбук", "Одноклассники", "Твиттер" - был һүҙҙәр пенсия йәшендәге ололарға ғына таныш түгелдәр. Балалары өсөн борсолған ата-әсә өсөн улар - яман ғәҙәт, хроник сир сығанағы, ә йәш быуын өсөн иһә - аралашыу мөмкинлеге биргән социаль селтәрҙәр. Теркәлеүҙәге еңеллек был сайттарҙың билдәлелегенә килтерә лә инде. Бөгөн "Фейсбук"та теркәлеүселәр һаны миллиард тирәһе кеше булһа, уның Рәсәй аналогы "Вконтакте" ла 120 миллион ҡулланыусы үҙ битен асҡан.**

# ВИРТУАЛЬ ДОНЪЯЛА ЙӘШӘП...

## бала тәрбиәләп буламы?



Социаль селтәрҙәрҙең киң таралыуы сәбәбе - уның кешенең аралашыуға мохтажлығын "һә" тигәнсе ҡәнәғәтләндерә алыуында. Ысынлап та, был селтәрҙәрҙә донъяның иң алыҫ төбәгендә йәшәп ятҡандар менән дә теләгәнсә яҙышырға, һөйләшергә була. Кеше көн оҙоно берәү менән дә аралашмаҫҡа мөмкин, ә эштән ҡайтып, компьютер тәймәһенә баҫыу менән аралашыуға "йәшел урам" асылып китә. Бер өйҙә йәшәгән ир менән ҡатындың да үҙ-ара "аська" аша аралашыуы тураһында күләп һөйләйҙәр ине бер-ике йыл элек, хәҙер ул күләмәс булыуҙан туктап, ысынбарлыҡҡа әйләнә бара. Карауаттың ике башында ноутбук тотоп ятҡан атай менән әсәй, ә уларҙың аяҡ остарында нетбукҡа текәлгән сабый төшөрөлгән фото күрһәгеҙ, был фотомонтаж түгел, ә көҙимге ғаилә күренеше, тип белегеҙ.

Әлбиттә, социаль селтәрҙәрҙән бойондороҡлоҡ артҡан һайын уға ҡаршы көрәшеүселәр һаны ла арта бара. Әммә интернет менән интернет аша ғына көрәшеү мөмкин. Шуға ла күләмәстәге кеүек парадокс килеп тыуа ла инде: "Интернет - яуызлыҡ" тип яҙылған Рус Православие Сиркәүенең рәсми сайтында. Ә сайт, билдәле, интернетта теркәлгән.

Кеше үҙ-ара һөйләшеү һәләтен юғалта, интернет, башлыса социаль селтәрҙәр беҙҙе ысынбарлыҡтан ситкә этәрә, тип ғауға күтәрер алдынан был проблеманың нигеҙе ниҙә икәнен төшөнөү кәрәктер. Социаль селтәр - шайтан селтәре, тип ҡарау ул тиклем дөрөҫлөккә тап килмәҫ. Унда насар нәмәләр күп, әлбиттә. Ләкин һине бер кем дә уларҙы ҡарарға көсләмәй бит. Беҙ уттан да зыян күрәбеҙ. Зыян күргән өсөн уттан баш тартыу - унан килгән файҙаны инҡар итеү ул. Был ахмаҡлыҡ. Интернет та шулай уҡ. Ул кешенең донъяны танып белеүен, уны өйрәнеүен еңеләйтеүсе мәғлүмәт майҙаны. Ҡуллана белгәндә, күп эштәрҙе еңеләйтеүгә биргән бәрәкәт. Мәғлүмәттең күп тупланыуы, уны эҙләүҙә еңеллек алтындай ваҡытынды экономияларға ла мөмкинлек бирә. Әммә ошо экономияланған ваҡытын кеше нимәгә сарыф итәсәк: яңы фән өйрәнергә йә өйрәтергәме, бизнес маҡсатындамы, әллә биттән биткә ырғып, үҙенә бер кәрәге булмаған яҙыуҙарҙы уҡып, видеолар ҡарауғамы - ошонда кешенең ихтыяр көсө асыла ла инде. Тимәк, интернеттың файҙаһы ла, зыяны ла бар. Кеше нимәне һайлай - барыһы ла уның үҙенән тора. Интернет кешене белемле итмәй, эшен еңеләйтмәй - кеше уны ҡулланып белем ала, эшен еңеләйтә. Шулай уҡ ул ваҡытты ла күп ашамай, ә кеше үҙе ваҡытын уға "һата". Проблеманың нигеҙе интернеттың дөрөҫ булмауында түгел, ә беҙҙең уны дөрөҫ ҡулланмауҙа.

Дөрөҫ ҡулланамы кеше интернетты, әллә юҡмы - был уның шәхси эше. Интернетҡа сығыу хоҡуғын сикләргә мөмкин, ләкин унан бер кемде лә тыйып булмай. Эйе, интернетта файҙалы мәғлүмәт бихисап. Социаль селтәрҙәр ҙә кешене виртуаль донъяға батыра алмай. Бары беҙҙең, ябай ҡулланыусыларҙың, күп нәмә хаҡында еңел фекер йөрөтөүебеҙ һәм үҙебеҙҙе ҡулда тотмауыбыҙ ғына киләсәктә бәлә булып әүерелеүе мөмкин. Дуҫтар менән аралашыу өсөн генә социаль селтәрҙә теркәлеүебеҙ ваҡыт үтеү менән унда "йәшәй" башлауға килтерә икән, проблеманың башы ошонда.

Әгәр һүҙ үҙебеҙ тураһында ғына барһа, артыҡ борсолмаҫҡа ла булыр ине. Беҙҙең виртуаль донъя менән мауығыуыбыҙ туранан-тура киләсәк быуын менән бәйләнгән. Социаль селтәрҙәрҙең әүҙем ҡулланыусыларының күп өлөшө - бөгөн йә иртәгә ата-әсә булырға йыйыныусы йәш ҡыҙҙар һәм егеттәр, йә булмаһа, бәләкәй сабыйҙары булған йәш ғаиләләр. Һорау тыуа: интернет аша аралашырға, белем алырға була, ләкин бала тәрбиәләргә, ғаилә ҡорорға буламы? Бер йорт диуарҙарында үҙ-ара интернет аша аралашҡан ғаиләләр ҡормаҫбыҙмы киләсәктә? Беҙ, интернет һүҙен белмәгән ата-әсәләрҙең балалары, аська һәм "Вконтакте"нан башҡаны белмәгән балалар тәрбиәләмәҫбеҙме? Компьютер, телефон, айпод йә айфон экранынан социаль селтәрҙә теркәлгән биттәге яңылыҡтарҙы ҡарағанда ошолар хаҡында ла онотмаҫҡа кәрәк. Әҙемтәләр бәкәлгә алып килеп һуҡҡас, уны төҙәтеүе, ай-һай, еңел булмаҫ.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Мансур ҠАҘАҠАЕВ, БашДУ аспиранты:** Балаларҙың күбеһен "виртуаль донъя" тәрбиәләй башлаған осорҙа йәшәйбеҙ. Был, бәлки, кешелектең яңы кимәлгә күтәрелеү сифатылыр, бәлки, үлеүе билдәһелер. Аныҡ әйтеүе ҡыйын. Ата-әсә, балалары үҙҙәрен танып-белергә өйрәнһен, тиһә, әлбиттә "тәрбиә дилбегәһе"н үҙ ҡулына аласаҡ. Теләмәһә инде... "Матрица" тәрбиәләр әле!

**Альбина САДЫҠОВА, журналист:** Ирем мәғлүмәт, техника тураһында уҡыу өсөн генә интернетҡа инһә, мин күпселеген "Вконтакте"ла ултырам. Бәләкәсебеҙ булғас, ваҡыт ары самалы, ә шулай ҙа мөмкинлек сығыу менән яңылыҡтар ҡарай һалып алам. Балаларымдың компьютер менән мауығыуын теләмәйем, апайымдың улы 3 йәше тулмаҫ борон уҡ, компьютерҙы үҙе ҡабыҙып, уйындар уйнай ине, ә мин 3,5 йәшлек ҡыҙымды, яҡын барма, тип тыйып ҡына торам. "Вконтакте"ла айырыла алмай ултырғандарҙың балаларын кем тәрбиәләр, тигәндән. Унда яҡшы мәғлүмәттәр ҙә күп бит. Мин, мәҫәлән, "Балалар өсөн башҡортса әҫәрҙәр" төркөмөнөң йыш ҡунағы. Унда ҡыҙымдың ҡыҙыҡтарын да теркәйем. Тәрбиәгә килгәндә, "Балам, һин улай эшләмә, ярамай", тип кенә өйрәтеп булмай баланы, уға яҡшы тәрбиә өлгөһө кәрәк. Әсәй интернетта көнө буйы ултыра икән, үҫкәс, бала ла уның ҡылығын ҡабатлаясаҡ. Сама кәрәк әсәйгә лә, балаға ла...

**Азамат САЛАУАТОВ.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ҒӘЙНӘ БАШҠОРТТАРЫ...

## юғалыу сигендә

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урыныһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Рәсил МӨХӘМӘТЙӘНОВ, Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:** Тарихи Башҡортостанда көн күргән милләттәштәребеҙҙең, шул иҫәптән Пермь крайында йәшәүсе башҡорттарҙың теленә, мәҙәниәтенә бәйле мәсьәләләр йылдан-йыл ҡырҡыулаша. Һуңғы осорҙа был инде демографик проблемаға әүерелеп китте. Илдә үткәрелгән һуңғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, Пермдә башҡорттар 23 процентҡа кәмегән. Төп сәбәп тел мәсьәләһенә бәйле. Үҙ ваҡытында Ғәйнә башҡорттарының теле республика хөкүмәте ярҙамынан мәхрүм ҡала. Бынан Татарстан оҫта файҙалана һәм башҡорт ауылдарында татар телен уҡыта башлай. Пермь крайының сәйәсәтле бер ҡасан да башҡорт мәҙәниәтен һаҡлауға йүнәлтелмәне. Башҡорттар иң күп йәшәгән Барҙа районында рәсми рәүештә үҙ сараларыбыҙҙы ла уҙғара алмайбыҙ. Ундағы хакимиәт башлығы хатта беҙҙең ҡоролтай эшмәкәрлеген тыйыуҙан да тартынмай. Шуға күрә башҡа райондарҙа беҙ асыҡтан-асыҡ эшләһәк, Барҙа районында нигеҙҙә ауылдар менән генә, хакимиәт ихтыярынан тыш, эш алып барырға мәжбүрбеҙ. Пермдә "Татарҙар һәм башҡорттар автономияһы" төбәк ойошмаһы бар. Ләкин ул татар халҡының мәнфәғәтен генә яҡлай.

1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса Барҙа районы халҡының 85 проценты башҡорт булһа, 2002 йылғы мәғлүмәт буйынса 60 проценты ғына үҙен башҡорт тип таный. Ғөмүмән, уҡытыу татар телендә алып барылғанға күрә, хәҙер ғәйнәләр үҙ диалектын да онотоу осорон кисерә. Ғәйнә башҡорттарына үҙ телдәрендә гәзит сығарыу мәсьәләһе менән тормошҡа ашырырға кәрәк. Балалар өсөн, бәлки, махсус әлифба нәшер итергә кәрәктер. Төбәктә башҡорт теле уҡытылмай икән, нисек тә булһа башҡа мөмкинлектәрҙе эҙләргә тейешбеҙ.

Әле кварталға бер тапҡыр урындағы ҡоролтай исеменән "Пермь башҡорттары" гәзите сығарыла. Халыҡ үҙ тамырҙарын онотмаһын өсөн шәжәрә байрамдары ойошторабыҙ. Быйыл "Рәсәй тарихы йылы" сиктәрендә төбәк кимәлендә "Тәньяҡ амурҙары" мәҙәни-мәғлүмәти акцияһын үткәрәбеҙ. Уның сиктәрендә шәжәрә, милли аш-һыу, фольклор коллективтарының конкурстарын ойошторабыҙ.

Яҡын арала хәл итә алырлыҡ мәсьәләләр бар. Беҙҙәге башҡорттар Башҡортостан юлдаш телевидениеһын ҡарай алмай.

Китапханаларҙы башҡорттар тураһында йыйынтыҡтар менән тәьмин итеү мәсьәләһен дә хәл итәһе бар. Иң көнүҙәк мәсьәлә - Пермдә Башҡортостан вәкиллеген асыу. Беҙҙән башҡа ҡалған күрше төбәктәрҙә бындай вәкиллектәр бар. Пермдә Башҡортостан мәҙәниәте көндәрен үткәреп, ике төбәк араһында килешеү төҙөргә кәрәк. Бындай килешеүҙең дә әлегә төҙөлгәне юҡ.

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уйҙар уңышлы булһын

Йәнде һәм тәнде өйрәнеүсе хәҙерге медицина кешенең уй-фекере уның тотош организмы физиологияһына йоғонто яһай икәнен шикләнмәй. Әгәр уйҙарығыҙ асыҡ түгел һәм һеҙ үҙ тәнегеҙгә кире сигналдар ебәреп, уны зарарлы токсиндар менән тултыраһығыҙ икән, улар һеҙҙең эшмәкәрлегегеҙҙе һүлпәнәйтеү генә түгел, ғүмерегеҙҙе лә ҡыҫҡарта. "Мега Тормош" - үҙендә ыңғай гәзәт, сиклаүҙарһеҙ фекерләү тәрбиәләү һәләте. Ошо гәҙәткә өйрәнеп, һеҙ һауытты яртылаш буш тип түгел, ә яртылаш тулы тип ҡабул итә башлаясаҡһығыҙ.

Бөйөк Олимпия чемпиондары спортта камиллыҡҡа өлгәшеү өсөн аңдың бөтҡөһөҙ көсөн һәм рухи дисциплинаның әһәмиәтен күптән аңлаған инде. Ярыштарҙа миҙал алыусыларҙы һәм "йүгереүселәрҙе" бары тик "чемпион көйләнеше" генә айыра. Нимә ул "чемпион көйләнеше"?

Һәр бөйөк спортсы тукланыу һәм күнекмәләр эшләү режимы менән бер рәттән, психологик күнекмә ысулдарын да ҡуллана. Күптәр, мейенең иҫ киткес психик энергияһын кәрәклә һөҙөмтә алыуға йүнәлтеү зарур, тип иҫәпләй. 1954 йылда Роджер Баннистер кеше өсөн мөмкин булмағанды эшләй - бер милде дүрт минуттан кәмерәк ваҡытта йүгереп үтә. Быға нисек өлгәшеүен һорағас, ул, мин бары тик үҙемдең ошо еңеүемде аңымда ошо кимәлгә еткәнсе кино таҫмаһы кеүек ҡабат-ҡабат ҡабатланым, ти. Рухи камиллыҡты һәм визуалләштереү ысулын бары тик спорт өлкәһе менән генә сикләргә ярамай. Быны һәр өлкәлә лә ҡулланырға мөмкин. Уңыш иртәгәһенә үк килмәҫ, әммә көсөгеҙҙә һәм энергияғыҙҙы хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашырыуға ебәрһәгеҙ, ул мотлаҡ киләсәк.

Тормошоғоҙҙағы һәр көн йәки ниндәйҙер ҙур ваҡиғаға әҙерләнгәндә, мәҫәлән, мөһим сығыш яһағанда, уйығыҙҙағы видеозалда иң яҡшы уңышҡа өлгәшеүегеҙ тураһындағы фильмды ҡабат-ҡабат ҡарағыҙ. Ошо еңеү һауаһын һулағыҙ, барлыҡ ваҡ ҡына деталдәрҙе лә яҡшы итеп күҙаллағыҙ. Үҙегеҙҙе йылмайыусан, ҡотлауҙар ҡабул итеүсе итеп күҙ алдына килтерегеҙ. Нимә тойорға һәм кисерергә теләйһегеҙ - ошо турала уйлағыҙ. Уныштан ҡәнәғәтлек кисереүегеҙҙе тойоғоҙ. Ижади фекерләү яҡшы һөҙөмтәләр бирә, бары тик уны үҙ ҡылыҡ-ғәҙәттәрегеҙҙе моделләштергәндә ғәҙәткә индереп алығыҙ.

Үҙегеҙ белгән барлыҡ кешеләр араһында иң ыңғай ҡарашлы кеше булығыҙ. Үҙегеҙҙә позитивлыҡ һәм шатлыҡ рухын үҫтерегеҙ. Ысын мәғәнәһендә мажаралар эҙләүсегә әүерелегеҙ һәм тормоштағы ҡаршылыҡтарҙы аҡыллыраҡ һәм юғарыраҡ булыуға саҡырыу тип ҡабул итегеҙ. Ауырлыҡтарҙы яратырға һәм уларҙы еңергә өйрәнегеҙ. Хәҙерге бизнестың иң бөйөк вәкилдәре - Геттинан башлап Тернерғаса - тормош ауырлыҡтарын ҡабул итергә һәм уларҙы яңы байлыҡ туплау өсөн ыңғай мөмкинлеккә әйләндерергә яратҡан. Еңеүселәр менән еңелеүселәр араһында айырма шунда ғына. Еңеүселәр һәр хәл-торошатан сығыу юлын таба.

**Робин ШАРМА.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Һаулыҡ өсөн яуаплылыҡ

Аллаһы Тәғәлә шәфҡәтле һәм мәрхәмәтле! Әгәр кеше ниндәйҙер сәбәп буйынса ныҡ ыҙалана, интегә икән, йәнде кире өйгә алып ҡайталар. Кеше үҙен ни тиклем нығыраҡ бысрата (тимәк, ыҙалана, ауырый), уға бының сәбәптәрен асыҡлау өсөн күберәк мөмкинлек бирәләр.

Дауаханалар - ауырыуҙарыңдың һәм проблемаларыңдың сәбәптәрен тыныс ҡына анализлау, ниндәй илаһи дини ҡанунды боҙғаныңды аңлау, уларҙы бөтөрөү сараһын күреү өсөн уйланыу урыны ул, йәғни кешегә рухи сәләмәт булыу, рухи сәләмәтлек артынан физик сәләмәтлекте нығытыу мөмкинлеге бирелә.

Бер ир (үҙе әйтеүенсә, бик агрессив була) онкология диагнозы менән дауаханаға эләгә һәм унда бик оҙаҡ ята. Һуңынан уны, өмөтһеҙ, тип сығаралар. Ә ул Тәурат китабын алып, урманға йәшәргә китә (был хәл йәйгеһен була). Ике ай ярымдан бөтөнләй икенсе - шәфҡәтле, миһырбанлы, мөхәббәткә тулы кеше булып әйләнеп ҡайта. Ҡайта ла үҙ иҫәбенә ҡорамдар төҙөй башлай. Тикшереүҙәр унда онкологик сирҙең эҙе лә ҡалмауын раҫлай.

Ошо ваҡыт эсендә ул тәбиғәт менән гармонияла йәшәй, шишмә һыуын эсә, тәбиғи аҙыҡ ашай, йәмғиәттән, цивилизациянан алыҫта була һәм ауралын мөхәббәт менән тултыра. Һөйөү барлыҡ бысраҡ энергетиканы ыңғайға әйләндерә! Күҙәнәктәре, мөхәббәт энергияһы менән тукланып, агрессив булыуҙан туктай һәм кеше һауыға!

Табиптар уларҙы нисек уҡытҡандар - шулай дауалай: тәүҙә бер дарыу менән, ул килешмәһә - икенсеһе менән, һуңынан өсөнсөһө, дүртенсеһе... Аҙаҡ инде, һеҙҙә хроник гастрит (панкреатит, холецистит, бронхит һ.б.), тиҙәр. Хроник, тимәк дауалап булмай торған. Шулай итеп, табиптар үҙҙәренән яуаплылыҡты ала. Уларға яуаплылыҡты алып ташлауы бер ни тормай - улар бит тап инструкция ҡушҡанса эшләй.

Кире тәьҫирен белер өсөн дарыуҙарҙың инструкцияһын уҡыһағыҙ, унда, үҙегеҙҙе үҙегеҙ ағыулайһығыҙ һәм бының өсөн фармсәнәғәт яуап бирмәй, тигән иҫкәрмә бар. Дарыу ашағандан аура таҙармай, чакралар тергеҙелмәй, тирбәлеш артмай. Шулай итеп, һеҙҙең сәләмәтлек өсөн бәрәү ҙә яуап бирмәй. Үҙегеҙҙең сәләмәтлегегеҙ өсөн яуаплылыҡты үҙ ҡулығыҙға алырға кәрәк.

Әлеге ваҡытта ауырыуҙар тиҙ һәм бер сәбәпһеҙ үҫешә һәм ҡайһы ваҡытта табиптар диагноз да ҡуя алмай. Сәбәбе ябай: күп кешеләр ергә ебәрелгән кеше тирбәлешкә сыҙай алмай - ауралары бысраҡ, чакралары көсһеҙ.

Был хәлһеҙлек, йоҡо килеү, хроник арыу, баш ауыртыуы, тын ҡыҫылыуы, ҡурҡыу хисе аша сағылыш таба. Шунан инде йөрәккә, ҡан тамырҙарына, нервылар системаһына көсөргәнеш килә, һөҙөмтәлә, йәшкә ҡарамаҫтан, инфаркт, инсульт ҡуҙғала.

Ә тирбәлеш даими үҫә! Быны аңлау бик мөһим! Тағы ла көсләрәк тирбәлешкә әҙер булырға кәрәк! Быны ни өсөн ауранды таҙартыу, шәхси тирбәлеште үҫтереү зарур!

Хатта ҡайһы берәүҙәр беренсе сеанстарҙа уҡ көслө уңайһыҙлыҡ тоя, иҫтән яҙып ҡолай, еңел генә тирбәлеште лә күтәрә алмай.

Ерҙең тирбәлеше артабан да үҫәсәк. Улар артҡан һайын вирустар, стафилококтар, стрептококтар, бәшмәктәр үрсей алмай (улар 10 герц булғанда ғына йәшәй) һәм бер ваҡыт беҙ уларҙан тулыһынса азат буласаҡбыҙ!

2012 йылдың һуңында көтөлгән энергетик һикереүгә сыҙарға кәрәк буласаҡ. Был яҡтылыҡ тәненә күсеү өсөн дә уңайлы мәл. Шуныһы ҡыуаныслы, күптәр бер яҡтан уй-фекерҙәр, эмоциялар, ғәмәлдәр, икенсе яҡтан, яҙмыш һәм сәләмәтлек араһында бәйләнеште аңлай башлаған. Хәҙер мөғжизәләр заманы һәм мөмкин булмаған бер нәмә лә юҡ, яҙмыш та, сәләмәтлек тә үҙебеҙҙең ҡулда. Һәр кеше сәләмәт һәм бәхетле булырға тейеш - эволюцияның маҡсаты шул.

**Рауфан МОРТАЗИН.**



## 4 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор". Сериал
13.20 "Смак"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Побег-2". Сериал
22.30 "Первый класс" с Иваном Охлобыстиным"
23.30 "Вечерний Ургант"
00.00 "Познер"
01.00 Ночные новости
01.20 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым"
01.40, 03.05 "Билокси Блюз"
03.00 Новости
03.45 "В паутине законе"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести - Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал
13.00 "Люблю, не могу!"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 57-я серия
15.45 "Кровинушка", 82-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 5-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Моя большая семья", 1-я и 2-я серии
22.55 "На дне знаний-2"
00.05 "Землетрясение. Кто следующий?"
01.05 "Вести+"
01.25 "Профилактика"
02.35 "Письма с Иводзимы". Историческая драма

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный". "Темнота". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор за неделю. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Паутина". Расплата". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". "Афера", 1-я и 2-я серии
21.25 "Странствия Синдбада". "Путь на запад". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "Центр помощи "Анастасия"
02.35 "В зоне особого риска"
03.05 "Рублевка. Live". Сериал
05.00 "Знаки судьбы". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00 Новости недели**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30 "Новости"**
**11.45 Новости недели (на русск. яз.)**
**12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**12.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Субботний диалог"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырсак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Забытые войны"**
**17.15 "Надо знать!"**
**18.45 "Бахетнама"**
**19.45 "Еду я в деревню"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Открытое небо". Специальный репортаж**
**23.00 "Следопыт"**
**23.30 "Загадочная история Бенджамина Баттона"**

## 5 ИЮНЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор". Сериал
13.20 "Смак"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Побег-2". Сериал
22.30 "Никита Хрущев. Голос и прошлого"
23.30 "Вечерний Ургант"
00.00 Ночные новости
00.20 "Гражданин Гордон"
01.20 "Забытое"
03.00 Новости
03.05 "Седьмой"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал
13.00 "Люблю, не могу!"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 58-я серия
15.45 "Кровинушка", 83-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 12-я серия
18.50 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Моя большая семья", 3-я и 4-я серии
22.55 "Специальный корреспондент"
23.55 "XXI век". К 100-летию Пушкинского музея
00.55 "Вести+"
01.15 "Профилактика"
02.25 "Честный детектив"
02.55 "Крутые девчонки"
04.15 "Закон и порядок"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный". "Перевертыш". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание, розыск!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Паутина". "Расплата". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". Сериал
21.25 "Странствия Синдбада". "Путь на запад". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Глухарь". Сериал"
01.30 "Квартирный вопрос"
02.35 "Чудо-люди"
03.05 "Рублевка. Live". Сериал
05.00 "Знаки судьбы". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 19.30 "Новости"**
**11.45 "Открытое небо". Специальный репортаж**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Башкорт йыры-2012"**
**14.15 "Весело живем"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Борсак"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "Забытые войны"**
**17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.45 "Байык-2012"**
**19.45 "Сделано в "Тамыре"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Семь жемчужин"**
**21.00 "Действующие лица"**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**23.45 "Загадочная история Бенджамина Баттона"**

## 6 ИЮНЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор". Сериал
13.20 "Смак"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Побег-2". Сериал
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Вечерний Ургант"
00.00 Ночные новости
00.20 "В контексте"
01.15, 03.05 "Багси"
03.00 Новости
04.00 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал
13.00 "Люблю, не могу!"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 59-я серия
15.45 "Кровинушка", 84-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 7-я серия
18.50 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Моя большая семья", 5-я и 6-я серии
22.55 "Исторический процесс"
00.30 "Вести+"
00.50 "Профилактика"
02.00 "Зубастики-2: основное блюдо". Фильм ужасов
03.40 "Закон и порядок"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный". "Под прикрытием". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание, розыск!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Паутина". "Расплата". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". Сериал
21.25 "Странствия Синдбада". "Путь на запад". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Глухарь". Криминальный сериал
01.30 "Дачный ответ"
02.35 "Чудо-люди"
03.05 "Рублевка. Live". Сериал
05.00 "Знаки судьбы". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 19.30 Новости**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30 "Новости" (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Тамле" (на башк. яз.)**
**14.15 "Весело живем"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семэр"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 "Забытые войны"**
**18.45 "Алтын тирмэ"**
**19.45 "Бонджорно, Уфа". Репортаж с XX Российско-итальянского форума**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Историческая среда"**
**23.00 КВН РБ. 1/4 финала сезона-2012. Игра вторая**

## 7 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Женский доктор", 19-я серия
13.20 "Смак"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Побег-2", 16-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Вечерний Ургант"
00.00 Ночные новости
00.20 "На ночь глядя"
01.15, 03.05 "Смертельные мысли"
03.00 Новости
03.20 "В паутине закона"
04.10 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия"
13.00 "Люблю, не могу!"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 60-я серия
15.45 "Кровинушка", 85-я серия
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 8-я серия
18.50 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Моя большая семья", 7-я и 8-я серии
22.55 "Поединок"
00.30 "Вести+"
00.50 "Профилактика"
02.00 "Зубастики-3"
03.45 "Закон и порядок". Сериал

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный".Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Паутина". "Расплата". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение", 3-я и 4-я серии
21.25 "Странствия Синдбада". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Глухарь". Сериал
01.35 "Генералы холодной войны"
02.30 "Чудо-люди"
03.00 "Рублевка. Live". Сериал
05.00 "Знаки судьбы". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 19.30 "Новости"**
**11.45 "Тэмле"**
**12.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Башкорт йыры" представляет…"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Гэлэмэт донъя"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Забытые войны"**
**18.45 "Пора разобраться"**
**19.45 "Волшебный курай"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Глас закона"**
**23.00 "Дневник памяти"**

## 8 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор", 20-я серия
13.20 "Смак"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.40 "Бременские музыканты"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.40 Церемония открытия Чемпионата Европы по футболу 2012. Сборная Польши - сборная Греции. Прямой эфир из Польши
00.00 "Шесть дней, семь ночей". Приключения
01.55 "Только ты". Мелодрама
03.00 Новости
03.05 "Только ты"
04.00 "Светлана Светличная. Светить всегда"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "Мусульмане"
09.10 "Ауаз"
09.55 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия"
13.00 "Люблю, не могу!"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести ПФО"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 61-я серия
15.45 "Кровинушка", 86-я серия
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 9-я серия
18.50 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Моя большая семья", 9-я и 10-я серии. Сериал
22.45 "Человек, который знал все"
00.30 Футбол. Чемпионат Европы. "Россия - Чехия"
02.45 "Профилактика"
03.55 "Закон и порядок"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный".Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Паутина-2". "Пуля справедливости". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". Сериал
21.25 "Следственный комитет". "Сенатор". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Глухарь". Сериал
01.35 "Генералы холодной войны"
02.35 "Чудо-люди"
03.00 "Рублевка. Live". Сериал
05.00 "Знаки судьбы". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Гэлэмэт донъя"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 19.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Пора разобраться". Ток-шоу**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.30, 17.30 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Забытые войны"**
**18.45 "Пора разобраться"**
**19.45 "Йома"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Юный спецназовец"**
**21.15 "Сабантуй-2012". Абзелиловский район"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 Криминальный спектр"**
**23.45 "Муз-базар"**
**00.15 "Дарман"**

## 9 ИЮНЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор", 21-я серия
13.20 "Смак"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Поле чудес"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.35 "В тени солнца наций"
22.45 "Что? Где? Когда?"
23.50 "Прыжок льва"
00.40 Чемпионат Европы по футболу-2012. Сборная Германии - сборная Португалии. Прямой эфир из Украины
02.45 "Все о еве". Драма
05.20 "В паутине законе"

### РОССИЯ 1
05.00 "Утро России"
09.00 "С новым домом!"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия"
13.00 "Люблю, не могу!"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 62-я серия
15.45 "Кровинушка", 87-я серия
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 10-я серия
19.00, 20.55 "Моя большая семья". Сериал
20.00 "Вести в субботу"
21.55 Футбол. Чемпионат Европы. "Нидерланды - Дания"
00.00 "Хроники измены". Драма
02.05 "Империя солнца". Биографическая драма
05.00 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.15 "Золотой ключ"
08.45 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Паутина-2". "Пуля справедливости". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Очная ставка"
17.30 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.25 "Новая жизнь сыщика Гурова. Продолжение". Сериал
21.20 "Русские сенсации"
22.15 "Ты не поверишь!"
23.15 "По праву". Детектив
01.10 "Час Волкова"
03.15 "Рублевка. Live". Сериал
05.10 "Знаки судьбы". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 19.30 Новости (на башк. яз.)**
**11.45 "Бонджорно, Уфа". Репортаж с XX Российско-итальянского форума**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Мелодии лета". Концерт**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.30 "Цирк в 13 метров"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Забытые войны"**
**17.30 Новости (на русск. яз.)**
**17.45, 18.45 Гала-концерт фестиваля ансамблей народного танца на приз им. Ф. Гаскарова**
**18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.45 "Еду я в деревню"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**23.00 "Следопыт"**
**23.30 "Спеши любить"**

## 10 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Выстрел"
07.35 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. Пин-код"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Смак"
10.55 "Дарья Донцова. Безумная оптимистка"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Освобождение"
15.55 "Про Любоvv". Мелодрама
18.00 Вечерние новости
18.20 "Принцесса Диана. Последний день в Париже"
20.00 "Кто хочет стать миллионером?"
21.00 "Время"
21.20 "Прожекторперисхилтон"
22.00 "Вся жизнь в перчатках"
22.40 "Голубая лагуна". Приключения
00.40 Чемпионат Европы по футболу 2012. Сборная Ирландии - сборная Хорватии. Прямой эфир из Польши
02.45 "Викторина"
05.15 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.30 "Суета сует". Комедия
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Записки экспедитора тайной канцелярии". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Записки экспедитора тайной канцелярии". Сериал. Продолжение
15.10 "Шутки в сторону"
17.05 "Долина роз". Мелодрама
19.15 "Рассмеши комика"
20.00 "Вести недели"
20.55 "Смеяться разрешается"
21.55 Футбол. Чемпионат Европы. "Испания - Италия"
00.00 "Перед закатом". Мелодрама
01.30 Торжественная цеермония закрытия XXIII кинофестиваля "Кинотавр"
02.50 "Горячая десятка"
04.00 "Комната смеха"

### НТВ
06.00 "Супруги". Сериал
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Своя игра"
14.10 "Лесник". "Сын на три дня". Сериал
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
21.40 "Тайный шоу-бизнес"
22.40 "Дэн". Криминальная драма
00.45 "Девять ярдов-2". Комедия
02.45 "Рублевка. Live". Сериал
04.45 "Знаки судьбы". Сериал

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.45 "Взгляд без слов"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Автограф. Р. Низамов"**
**10.00 "Бауырсак"**
**10.15 "Городок АЮЯ"**
**10.25 "Шэп арба"**
**10.35 "Гора новостей"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Байтус"**
**11.15 "Семэр"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.45 "Алтын тирмэ"**
**12.30 Новости недели**
**13.00 "Тэмле" (на башк. яз.)**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Историческая среда"**
**16.30 "Замандаштар"**
**17.00 "Воскресение"**
**17.30 Вечер памяи Т. Каримова**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**19.00 "Весело живем"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Новости спорта"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Сабантуй-2012"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык-2012"**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 "Башкортостан - страна орлов"**

✓ ***Комиссиялар көсө менән генә был хаталарҙы бөтөрөп булмаясаҡ. Шуға ла баш ҡалабыҙҙың йөҙөнә, телебеҙгә битараф булмаған кешеләрҙе ошо көрәштә ҡатнашырға саҡырабыҙ.***



*ЙӨҘ ОЯЛА!*

# ЯҘЫУҘАҒЫ ХАТАЛАР ҘА...

## баш ҡала бәләһе бит

**Ауыл халҡы картуф баҡсаһында колорадо ҡуңыҙы сүпләп ялҡты. Ҡала ерҙәрендәге хаталы яҙыуҙарҙы ла ошо хәл - колорадо ҡуңыҙы сүпләү менән сағыштырып булалыр. Махсус комиссиялар хаталарҙы тикшереп, төҙәтеп тора, яңылары өҫтәлеп тора...**




Республикабыҙҙың баш ҡалаһында Башҡортостандың иң белемле кешеләре тупланған булыуына ҡарамаҫтан, был "ҡуңыҙ"ҙарҙы сүпләп тә бөтөрөрлөк түгел. Ҡала округы хакимиәте, районлар хакимиәттәре комиссиялары, шулай уҡ башҡорт телендә сыҡҡан гәзиттәр алып барған көрәштә әлегә хаталар еңә килә.

Яңыраҡ ҡала округы хакимиәте комиссияһы ағзалары тағы ла Өфө буйлап рейдҡа сыҡты. Улар тарафынан ойошмалар, предприятиеларҙың алтаҡталарындағы, бланкыларҙағы, ғөмүмән, башҡортса һәм русса яҙып эленгән бар яҙыуҙарҙағы хаталар тикшерелә, төҙәтелә. Әлбиттә, комиссиялар көсө менән генә был хаталарҙы бөтөрөп булмаясаҡ. Шуға ла баш ҡалабыҙҙың йөҙөнә, телебеҙгә битараф булмаған кешеләрҙе ошо көрәштә ҡатнашырға саҡырабыҙ. Һуңғы йылдарҙа төҙөкләндереү буйынса алға ҙур аҙымдар яһаған баш ҡалабыҙҙың бәҫен төшөргән күренеште бергәләп бөтөрәйек. Хаталар йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәһен.

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

*БАҠСА*

# ЛӘЛӘ - ЯҘ ТӨҪӨ



**Ләлә сәскәһе (тюльпан) һәр кешегә яҙҙы, ҡояштың беренсе нурҙарын хәтерләтәлер, моғайын. Был яҙғы сәскәләр төрлө ҙурлыкта, формала, төҫтә булыуы менән баҡсасыларҙың да һөйөүен күптән яулаған. Бөгөн гәзит уҡыусылар менән ләлә үҫтереүҙең ҡайһы бер серҙәре менән уртаҡлашмаҡсымын.**

Ләләне ултыртыу урынын дөрөҫ һайламаһың, сәскәнең һуғанбашы серей һәм яҙын ул үҫеп сыҡмаясаҡ. Ләлә яҡтылыҡ яҡшы төшкән, көслө һыуыҡ елдәрҙән ышыҡ урында үҫә. Ҡояш насар төшһә, ләләләр яҡтылыҡ эҙләп һуҙыласаҡ, ә һуғанбаштары туҡлыҡлы матдәләрҙе етерлек күләмдә ала алмаясаҡ. Тупраҡ һыуҙы яҡшы үткәрергә тейеш. Шулай уҡ был урында алдағы йылдарҙа һуғанбашлы һәм картуф, помидор кеүек эт ҡарағаты һымаҡтар төркөмөнә ҡараған үҫемлектәр үҫмәҫкә тейеш, юғиһә, уларҙың вируслы сирҙәре ләләләргә күсәсәк.

Яҙын сәскәләр сыҡҡас, уларҙы азот ашламаһы менән туҡландырырға кәрәк. Ун көндән калий сульфаты өҫтәлгән азотлы ашлама, тағы ла ике аҙнанан калий сульфаты менән туҡландырырға. Артабан тупраҡты йомшартып торорға кәрәк. Ләләләрҙе 3-4 тапҡыр яҡшы итеп һыу менән туйындырып алыу мотлаҡ. Уларҙың тамырына һыу төшөп етһен өсөн 40-60 л һыу кәрәк. Ләлә сәскә атып бөткәс, ике аҙна эсендә, уның өҫкө өлөшө һарғая башлағанға тиклем һыу һибегеҙ. Тап ошо ваҡытта яңы һуғанбаштар нығлап үҫешә. Һулыған сәскәләрҙе өҙөп алып торноғоҙ. Букет өсөн ләләләрҙе бер-ике япрағы менән ҡырҡырға, юғиһә, һуғанбаштар насар сифатлы була.

Ләләләр һарғайып бөткәс, уларҙы ҡаҙып алырға кәрәк. Үҫемлек һабағының тулыһынса кибеп бөтөүен көтмәгеҙ, ул саҡта оя тарҡалып, һуғанбаштар ерҙә тороп ҡала. Был эште уртаса июнь, июль уртаһында башҡарырға. Һуғанбаштарҙы йәшниктәргә һалабыҙ һәм ел яҡшы үткән урынға киптерергә ҡуябыҙ. 2-3 аҙнанан уларҙың иҫке ҡабығын алып ташлап, төбөн ипләп таҙартырға. Был ваҡытҡа аҡһыл һары төҫтәге яңы "күлдәк" барлыҡҡа килеп өлгөрә. Ләлә һуғанбаштарын ҡаҙып алғанда уларҙы ҡояшта тоторға ярамай, сөнки ҡояш һуғыуы ихтимал. Был үҙ сиратында һуғанбаштың сирләүенә килтерә. Мин үҙем һуғанбаштарҙың торошон тикшереп торам. Сирле күренгәндәрен йәлләмәйенсә ташлайым. Һатып алған һуғанбаштарҙы ла иғтибарлап ҡарарға кәңәш итәм. Көҙөн ергә ултыртыр алдынан һуғанбаштарҙы ярты сәғәт тирәһе фундазол иҙелмәһендә тотам. Әгәр ул юҡ икән, сағыу төҫтәге марганцовка иҙелмәһендә тотоп алығыҙ. Иҫке капрон колготкиҙарға һуғанбаштарҙы тултырып, ике яҡлап бәйләп иҙелмәгә төшөрһәң, тағы ла уңайлыраҡ. Сәскән саҡта берәмләп алаһың да, ултыртып бараһың.

Ләләләрҙе түбәндәгесә сәсеү уңайлыраҡ. Уртаса киңлектәге таҡта алаһың һәм уны түтәлгә һалаһың. Таҡта өҫтөнә баҫып, көрәк менән уның буйынан соҡор ярам. Ҡул менән тигеҙләп, көл һибәм, көҙгө ашламалар һалам, һуғанбаштарҙы сәсәм. Таҡтаны күсереп һалам һәм ошо уҡ эштәрҙе башҡарам. Бер ҙурлыҡтағы һуғанбаштарҙы бер урынға сәсергә тырышам. Сәсеү тәрәнлегенә килгәндә, соҡор өс һуғанбаш тәрәнлегендә булһын, юғиһә, беҙҙең тәбиғәт шарттарында улар туңа. Һарымһаҡты ла ошо ысул менән сәсәм. Ләләне беренсе көҙгө ҡырауҙар башланып, ер һыуынғас ултыртам. Ер бер-ике тапҡыр ағарып өлгөргән булырға тейеш. Был ваҡытта сәселгән һуғанбаш тамырланып өлгөрә, әммә һабаҡ ебәреп өлгөрмәй, тимәк, яҡшы ҡышлаясаҡ, яҙын матур итеп сәскә атасаҡ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*ЙӘШЕЛ ДАУА*

## ҠУҘҒАЛАҠ



**Ҡуҙғалаҡ флавоноид, липид, аҡһым, минераль тоҙҙар, органик кислоталар (алма, ҡуҙғалаҡ, лимон кислоталары), каротин, В1, В2, С, К, РР витаминдарына бай.**

Ҡуҙғалаҡ аш һеңдереү процесын, эсәк, үт ҡыуығы, бауырҙың эшен яҡшырта. Шулай уҡ был үлән колит ауырыуы төрҙәрен, ашҡаҙан-эсәк юлы ауырыуҙарын, геморройҙы дауалауҙа ҡулланыла. Ҡуҙғалаҡ түлһеҙлектән дә ярҙам итә.

**Рецебы бик ябай:** 1 ҡалаҡ ҡуҙғалаҡҡа бер стакан эҫе һыу ҡойорға, һүрән утта 1 минут ҡайнатырға, һыуынғансы төнәтергә. Стакандағы төнәтмәне өскә бүлеп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Ҡуҙғалаҡты бешкәнсе ҡайнатырға ярамай, был осраҡта ҡуҙғалаҡ кислотаһы барлыҡҡа килә.

Шулай уҡ ҡуҙғалаҡты ауырлы саҡта, бөйөр шеше ауырыуы, юғары кислоталы гастрит, ашҡаҙан һәм бөйән эсәге яман шеше ауырыуҙары осрағында ҡулланырға ярамай. Ҡуҙғалаҡ кальций матдәһен үҙләштереүҙе ауырлаштыра.

## МАЙ ЛАНДЫШЫ



**Ландыш (ынйы сәскәһе) төнәтмәһе астма, өйәнәк, көҙән йыйырыу, фалиж, инсульт, Базедов ауырыуы, баш һәм ашҡаҙан ауыртҡанда ҡулланыла.**

**Йөрәк ауырыуҙары.** Банканың 3/4 өлөшөн тәшкил иткән яңы ландыш сәскәләрен ҡаплағансы спирт ҡойорға. 2-3 аҙна төнәтергә, һөҙөргә. Һыу ҡатыштырып, көнөнә 2-3 тапҡыр 10-15 тамсы төнәтмә эсергә.

**Көҙән йыйырыу, Базедов ауырыуы.** 4 грамм яңы ландыш сәскәләрен 1 стакан ҡайнар һыуға һалырға. Һыуынғас, һөҙөп алырға. Һәр ике сәғәт һайын 1 ҡалаҡ эсергә.

**Мейегә ҡан һауыу ҡурҡынысы янағанда** шул уҡ төнәтмәне эшләргә. Тик көнөнә 3 тапҡыр 1 ҡалаҡ эсергә.

**Глаукома.** 1 балғалаҡ яңы ландыш сәскәләре, ярты стакан яңы кесерткән япраҡтарына бер ҡалаҡ һыу һалырға. Ҡараңғы урында 8-9 сәғәт төнәткәндән һуң, ярты балғалаҡ сәй содаһы ҡушырға. Килеп сыҡҡан массаны күҙҙәргә ябырға.

**Конъюнктивит.** Ландыш сәскәһе төнәтмәһенең 10 тамсыһын алдан ҡайнатып алынған 90 тамсы йылы һыу менән ҡатыштырырға. Марля тампонын сылатып, күҙҙәргә ябырға.

Ландыш төнәтмәләрен бөйөр һәм бауыр ауырыуҙарының киҫкен осрағында ҡулланырға ярамай. Ландыштың бешкән ҡыҙыл емештәре ағыулы. Ландыш менән ағыуланыу һәм уны кәрәгенән артыҡ ҡулланыуҙың төп билдәләре: күңел болғана, уҡшыта, диарея, аритмия, парасистолия, йөрәк ҡарынсығы тахикардияһы, мускулдарҙың көсһөҙләнеүе, баш ауырта, тирегә аллергия сыға, үтә ярһыулыҡ күҙәтелә, күҙҙең күреү һәм төҫтәрҙе айырыу һәләте боҙола.

**Рим ӘХМӘДОВ.**

*"Нефтсе" мәҙәниәт һарайының тағы бер төп йүнәлеше - балалар, үҫмерҙәр һәм ололар менән эшләү. Бөгөнгө көндә бында барыһы 15 художестволы үҫешмәкәр коллектив халыҡ менән маҡсатлы эш алып бара.*



ӨФӨЛӘ БАР БЕР ЙОРТ

**Өфө ҡалаһының үҙәк өлөшөндә урынлашҡан "Нефтсе" мәҙәниәт һарайы лайыҡлы рәүештә Башҡортостандың мәҙәни-эстетик үҙәге һәм иң алдынғы мәҙәниәт усағы иҫәпләнә. Бөтөн Рәсәй һәм республика смотрҙары, конкурстары, тантаналы саралар, ғәҙәттә, ошо мәҙәниәт һарайында үтә. Яңыраҡ үҙенең 30 йыллыҡ юбилейын билдәләгән "Нефтсе" мәҙәниәт һарайының ҡаланың мәҙәни тормошонда тотҡан урыны, башҡарған эштәре тураһында мәҙәниәт һарайының коммерция эшмәкәрлеге буйынса директор урынбаҫары Әлфиә Барый ҡыҙы ҒИМАҘИЕВА һөйләй.**

# УТЫҘ ЙЫЛ БУЙЫ...

## мәҙәни тормош үҙәгендә



### Статусы юғары

Башҡортостан нефтселәре өсөн бынан 30 йыл элек төҙөлгән был мәҙәниәт һарайы ике йыл элек БР Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағына күсте. Өфөнөң үҙәгендә урынлашҡанғамы, шундай мөһәбәт архитектура бинаһы булғанғамы - асылған көнөнән алып ул һәр ваҡыт статусы буйынса башҡа мәҙәниәт усаҡтарына ҡарағанда юғарыраҡ торҙо. Элек-электән хөкүмәт тарафынан үткәрелгән ҙур саралар, тантаналы кисәләр, байрамдар, Бөтөн донъя башҡорттарының өс ҡоролтайы ла был бинала үтте. Хәҙерге ваҡытта был мәҙәниәт усағы Рәсәй масштабындағы төрлө концерттар, конференциялар уҙғарыу урыны булып тора. Башҡортостан, Рәсәй эстрадаһы шоу-бизнесының данлыҡлы йондоҙҙары беҙгә йыш килә. Шулар араһында Валерий Леонтьев, Ирина Аллегрова, Филипп Киркоров, Максим Галкинды әйтеп китергә мөмкин. Бынан тыш, бөтөн донъяға билдәле булған "Венаның Штраус-оркестр"ы, Мариин театрының Валерий Гергиев етәкселегендәге оркестры, Владимир Спиваковтың "Мәскәү виртуоздары" коллективы беҙҙең сәхнәлә йыш сығыш яһай. Республика ғорурлығы булған Башҡортостандың милли симфоник оркестры яҙлы-көҙлө үҙенең традицион концерттарын, Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле концерттарын ошо сәхнәлә ойоштора. "Байыҡ", "Башҡорт йыры", "Гәлсәр һандуғас", "Юлдаш йыры", "Урал моңо", "Йәшлек-шоу" проекттары, "Һылыуҡай" конкурсы ла беҙҙең мәҙәниәт һарайының статусын күтәрә. Был сараларҙың тап ошо бинала үтеүе мәҙәниәт һарайының юғары кимәлдә эшләй ала икәнен дә күрһәтеп тора.

### Кесеһенә лә, олоһона ла

"Нефтсе" мәҙәниәт һарайының тағы бер төп йүнәлеше - балалар, үҫмерҙәр һәм ололар менән эшләү. Бөгөнгө көндә бында барыһы 15 художестволы үҫешмәкәр коллектив халыҡ менән маҡсатлы эш алып бара. Бал, ритм-балет, халыҡ бейеүҙәре ансамблдәре һәм студиялары, художестволы гимнастика студияһы, вокал төркөмө, театраль студияларҙа бер үк ваҡытта ике мең бала һәм үҫмер үҙенең һәләтен тормошҡа ашыра һәм үҫтерә ала. Комаров исемендәге балалар ижад йортон иҫәпкә алмағанда, беҙҙең мәҙәниәт һарайы ошо йәһәттән балалар һәм ата-әсәләр менән киң масштабта эшләй. Етмәһә, ҡалабыҙҙың иң ҙур административ районы булған Киров районында "Нефтсе" - берҙән-бер мәҙәниәт һарайы.

"Поколение" халыҡ ветерандар хоро күп йылдар эшләй килә. Хәрби-патриотик йырҙарҙан тыш, уның репертуарында халыҡ йырҙары күп. "Ассоль" өлгөлө вокал-хореографик студияһы, "Своими ногами" халыҡ исемен йөрөтөүсе заманса бейеү студияһы шөғөлләнеүселәре Рәсәй күләмендә күп тапҡырҙар танылыу тапты. Бөгөнгө үҫмерҙәр һәм йәштәр заманса бейеүҙәр менән ныҡ ҡыҙыҡһына, "Ренессанс" шоу-студияһы, "Эффект" заман хореографияһы студияһы уларҙың был талаптарына тулыһынса яуап бирә. Халыҡ бейеүҙәре менән шөғөлләнеүселәр "Шаян" халыҡ бейеүҙәре ансамбленә йөрөй. Рәсәй кимәлендә даны яңғыраған "Совершенство" художество гимнастикаһы студияһы эше маҡтауға лайыҡ. Мәҙәниәт һарайының эшендә айырым урын алып тороусы халыҡ театры бар. Петр Шеин төҙөгән коллектив 30 йыл эсендә тамашасы хөкөмөнә 50-нән ашыу спектакль сығарҙы. "Арлекино" театраль студияһында балалар шөғөлләнә. "Майҙан" фольклор-эстрада йыры ансамбле башҡорт фольклорына, башҡорт халыҡ йырҙарына бағышланған программалары менән тамашасыға яҡшы таныш. Киләсәктә мәҙәниәт һарайында тағы ла студиялар эшен киңәйтергә, ҡурайсылар ансамбле төҙөргә уйлайбыҙ.

### Реклама - йәмғиәтте этәреүсе

Һуңғы ике йылда коллективта яңы бүлек - коммерция бүлеге барлыҡҡа килде. Ҙур тиҙлек заманында кеше мәғлүмәтһеҙ үҙаллы хәрәкәт итә алмай. Беҙҙең маҡсат - мәғлүмәт яланын мәғлүмәт менән тултырыу, шуға ла беҙ үҙ эшебеҙҙә рекламаға ҙур урын бирәбеҙ. Беҙгә бында электрон һәм баҫма матбуғат саралары ҙур ярҙам күрһәтә. Һәр сара тураһындағы иғланды радио-телевидениеға, реклама журналдарының һәр береһенә урынлаштырырға тырышабыҙ. Фасадтағы реклама баннеры ла халыҡтың иғтибарын йәлеп итә. Үҙебеҙҙең сайтҡа иғландар урынлаштырабыҙ. Унда виртуаль ысынбарлыҡта билет һатып алып була. Был хеҙмәт менән ҡулланыусылар арта бара. Телефондан заказдар ҡабул итәбеҙ, мәҙәниәт һарайында билет һатыу хеҙмәтен булдырҙыҡ.

Төрлө йүнәлештәрҙә эшләү, төрлө жанрҙағы коллективтар ҡабул итеү тәжрибәһенән сығып, сәнғәт үҫешенең төп этәргес сараларының береһе итеп продюсерлыҡ эшен билдәләр инем. Республикала булған продюсер үҙәктәре йышыраҡ Татарстан артистары менән эшләй. Һуңғы ваҡытта Айрат Мусин, Рөстәм Баймөхәмәтов менән Заһир Ҡотлосурин төҙөгән продюсер үҙәктәре эшмәкәрлеге Рәсәй һәм сит ил йондоҙҙары менән эшләүгә йүнәлтелгән. Башҡорт эстрадаһы артистары менән Вилдан Яруллин етәкселегендәге "Ҡаруанһарай" продюсер үҙәге яҡшы эшләй. Күптән түгел беҙҙең мәҙәниәт һарайында Лилиә Ишемйәрова менән Урал Мортазин һәм Нәсимә менән Азамат Тимеровтарҙың концерты үткәйне. Проект бик уңышлы булды һәм был парҙар үҙҙәренә үҙҙәре продюсер булараҡ сығыш яһаны. Байегеттең продюсерлыҡ һәләтенә һоҡланам, ул йыл да шоу программа әҙерләй. Продюсерлыҡ эше менән бер рәттән, режиссерлыҡ эшендә Сулпан Аҫҡарованың һәләттәрен билдәләп китер инем. Сценарийҙар яҙыусы Зөһрә Бураҡаева менән берлектә эшләгән проекттарҙа уны һәләтле режиссер итеп таныттылар. Бына ошондай таланттар менән беҙ үҙебеҙҙең продюсерлыҡ үҙәген ныҡлы аяҡҡа баҫтырырбыҙ, тигән өмөттәмен.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨСЛӨ ҠУРҠЫНЫС ТҮГЕЛ...

## үсле ҡурҡыныс

Тамаҡты йыртҡан аш түгел, тормошто боҙған дуҫ түгел.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙегеҙгә, һәләттәрегеҙгә ышанығыҙ! Үҙ көсөгөҙгә һәм мөмкинлектәрегеҙгә ныҡлы һәм нигеҙле ышанмай тороп, бәхетле һәм уңышлы булып булмай.

**(Норман Винсент Пил).**

Йәшәүҙән ҡурҡмағыҙ. Йәшәү кәрәк икәненә ышанығыҙ һәм ошо ышаныс, өмөт быны фактҡа әйләндерергә ярҙам итер.

**(Уильям Джемс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Берҙән-бер көндә Хужа Насретдин йәшәгән илдә батшаның иң аҡыллы кәңәшсе-вәзире донъя ҡуя. Донъя ҡуйыр алдынан вәзир батшаға: "Миңә алмаш итеп беҙҙең батшалыҡтағы иң етди кешене эҙлә, сөнки етдилек - аҡыл эйәләренә генә хас булған сифат", - тип әйтеп ҡалдыра. Батшаның вәкилдәре бар батшалыҡтан ошондай етди аҡыл эйәһен эҙләргә сығып китә. Бына улар Хужа Насретдин йәшәгән ауылға ла килеп етә. Насретдин улар килгәнсе үк батшаның иң аҡыллы вәзире үлеп ҡалыуы тураһында ишеткән була. Батша яңы аҡыл эйәһен ниндәй сифаттарына ҡарап һайлаясағы тураһында ла алдан һиҙемләй, сөнки иң етди кеше - ул иң аҡыллы кеше, тигән риүәйәтте яҡшы белгән була. Хужа Насретдин тиҙ генә хәйлә ҡора: батша вәкилдәренә балыҡ йылымы йөкмәп, йылғанан ҡайтып килешләй тап була. Вәкилдәр Хужаның был төбәктәге иң бай кешеләрҙең береһе булғанын белә һәм шуға унан аптырап һорайҙар: "Был илдә балыҡ тотоу менән иң ярлы кешеләр генә шөғөлләнә. Ә һин бит байһың, ниңә йылым йөкмәп йөрөйһөң?" "Мин тап ошо йылым һәм балыҡ тотоу шөғөлө ярҙамында байыным да инде, - ти Хужа, - элекке шөғөлөмә рәхмәтле булыуымды белгертеү өсөн мин был йылымды гел үҙем менән йөрөтәм..." "Бына был иң етди, тимәк иң аҡыллы кеше! - тип һығымта яһай батша вәкилдәре. - Ярлы кеше байыһа, үҙенең ҡасандыр ярлы булғанын белгертмәҫ өсөн үткәндәрен, хатта туғандарын онота, үткәндәге ярлы хәлен хәтерләткән бар нәмәнән ваз кисә. Ә Хужа Насретдин бер нимәне лә онотмаған..." тип һығымта яһай вәкилдәр һәм Хужа тураһында батшаға хәбәр итә. Шулай итеп, Хужа Насретдин батшаның яңы аҡыл эйәһе-вәзире итеп тәғәйенләнә. Үҙен вәзир итеп тәғәйенләгән көндө Хужа йылымын үҙе менән алмай, алыҫҡараҡ йәшереп ҡуя. Уны батшаға тәҡдим иткән вәкилдәр аптырап ҡала һәм унан:" Насретдин, ә һин йылымыңды гел үҙең менән йөрөтәм, тигәйнең, әле уны ҡайҙа ҡуйҙың?"- тип һорай. "Балыҡты тотҡас, йылымды ташлайҙар..." тип яуап бирә Насретдин..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 1 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 2097

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.